ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-2 март - апрель (буранай - алағарай) 2021

№ 13 (951)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Уҡытыусыларға...** рәхмәтле булайыҡ! 5



**Генерал яҙмышы:** Хаджи-Әхмәт Ишбулатов 7



**Башҡорт халҡын үҫтереү...** ошо документтың нигеҙенә һалынған 9



**Уралтауға ҡот ҡайтарыр Салауат!** 11



**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу башланды. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Әммә һеҙгә 5 апрелдән 15-нә тиклем ташламалы - 619 һум 08 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә тоғро ҡалып, ошо осорҙа дәррәү генә яҙылып, уның дуҫтарын, уҡыусыларын арттырыуға ла булышлыҡ итәйек.***

***Мөхәрририәт.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Мәғлүм булыуынса, ришүәт алған кеше генә түгел, биргән кеше лә енәйәтсе. Ә һеҙ ришүәт биргәнегеҙ бармы?

***Әмир ҠУНАҠҠУЖИН, Көйөргәҙе районы:*** Философтар янған утҡа, аҡҡан һыуға, башҡа кешенең эшләгәненә мәңге ҡарарға була, ти. Шунын кеүек, ришүәт темаһы ла мәңгелек. Ғәҙәттә, беҙ ришүәт тип ҙур вазифа биләгән кешегә ниндәйҙер хәл итеп булмаҫтай проблеманы сисеүҙә булышлыҡ итеүгә өмөт итеп, шундай уҡ ҙур суммала аҡса биреүҙе күҙ уңында тотабыҙ.

Бер биш-ун йыл элек статистика беҙҙең илдә ришүәт алыу беренсе урында ЮХХДИ системаһында күҙәтелә, ти ине. Хәҙер был тармаҡта закондар көсәйтелгәс, ҡулдарын һоноп торған автоинспекторҙар кәмей төшөүе хаҡында ла билдәләне статистиктар.

Ришүәт алыу-биреү бер бөгөн генә уйлап табылған күренеш түгел. Ул элек-электән булған алым. Күптәр иғтибар иткәне барҙыр әле, күптән түгел генә поликлиника, дауаханаларҙа ҡаҙ-өйрәк тултырылған ҙур-ҙур сумкалар күтәргән апай-инәйҙәр ҡабул итеүгә сират көтөп тормай инеп китә торғайны. Күстәнәс проблемаларымды тиҙ генә хәл итте, тип маҡтанып йөрөгәндәрен дә ишеткәнем бар. Ә бүләктәре-күстәнәстәре булмаған ысын ауырыуҙар сәғәттәр буйы сират көтөп ултырырға мәжбүр ине. Быны бит врачтар уйлап тапмаған, уларҙы беҙ үҙебеҙ шуға өйрәтәбеҙ, бер-ике сәғәт ваҡытыбыҙҙы экономиялабыҙ тип, аҡ халатлыларҙы ла намыҫтары менән һатыу итергә мәжбүрләйбеҙ.

Ошондай йәшерен ришүәттәр аҙым һайын тулып ята. Миңә бынан 14 йыл элек баш ҡалабыҙ дауаханаларының береһендә операция яһатырға тура килде. Хирург палатаға инеп, иртәгә операция яһайбыҙ, тип, пациентҡа иғлан итеү менән уныһы ниндәй коньяк алырға кәрәклеген һораша башланы. Медик арзанлы коньяк эсмәйәсәген иҫкәртте. Мин бер палатала ятҡан иптәштәрҙән ни өсөн быны эшләгәндәрен төпсөнөп һорашам, бөтәһенең дә яуабы бер төрлө, йәнәһе, хирург операция яһағанда һиңә иғтибарлыраҡ буласаҡ, кәрәк икән, сит илдә етештерелгән медпрепараттар ҙа ҡулланасаҡ. Ә Гиппократ анты ҡайҙа? Уны дәүләт ошо операцияны тейешенсә яһаһын өсөн алты йыл уҡытмағанмы ни?

Йәки икенсе осраҡ. Ауырыуҙан һуң бер йыл 3-сө төркөм инвалиды булдым. Осор тамамланғас, тағы медицина тикшереүе үттем, документтарҙы комиссияға тапшырҙым. Бер көндө унын ултырышына саҡырттылар. Төрлө-төрлө күп һорау биргәс, көтөп ултырырға ҡушып, коридорға сығырға ҡуштылар. Ун минуттан медсестра сыҡты ла ҡағыҙ киҫәге күрһәтте. Унда "15 000 р." тип яҙылғайны. Йәнәһе, ун биш мең һум бирһәм, инвалидлыҡты тағы бер йылға оҙайтасаҡтар. Мин ундай уйындарҙа ҡатнашмайым, тип сығып киттем. Медсестра артымдан сыҡты ла, инвалидлыҡ өсөн айына күпме алыуымды һорашты, 6 800 һум тигәс, ун ике айға ҡабатланы ла, был сумма 15 мең һумдан артыҡ, тип күҙемә ҡараны. Мин намыҫым менән һатыулашмайым, тип китеп барҙым.

Шулай ришәүәтте биреүсе булмаһа, алыусыһы ла булмаҫ ине. Илдә уны тулыһынса бөтөрөүен бөтөрөп булмаҫ, ә ҡырҡа кәметергә мөмкин. Быйың өсөн закондарҙы көсәйтергә кәрәк. Бер миллион һум өсөн дә, бер миллиард өсөн дә бер төрлө яза ҡаралған тип әйтер инем дә, яңылышырмын кеүек, сөнки беҙҙә күберәк алған һайын яза кәмерәк тойола кеүек. Шуға күрә, миллиардлап һум ришүәт алған губернаторҙар, депутаттар, генералдар милли герой ролендә йөрөй хәҙер. Беҙҙең илдә дәүләт тарафынан "кәмһетелгәндәр"ҙе йәлләргә яраталар бит, шуға күрә, Аркадий Райкин әйткәнде был осраҡҡа ҡулайлаштырып, ришүәтте еңеп булмаясаҡ, ә еңгән хәлдә йәшәүе күңелһеҙ буласаҡ, тиергә мөмкин. Ришүәт, коронавирус сире кеүек, мутациялана. Хәҙер уны "вазифа вәкәләттәрен арттырып ҡулланыу" тип кенә әйтәләр. Киләсәктә лә үҙ-үҙен аҡлау өсөн тағы ла өр-яңы терминдар уйлап табырҙар әле. Бер киногерой әйтмешләй, мафия - үлемһеҙ...

АФАРИН!

# УЙЫНДА НИМӘ - ТЕЛЕНДӘ ШУЛ...

**"Минең көләмәстәремдең асылы шунда - кешеләргә дөрөҫөн әйтәм. Иң көлкөлө шаяртыу был", - тигән Бернард Шоу. Ә бына тормоштағы күренештәргә ҡарата балалар күҙлегенән сығып бағыу, улар теленән дөрөҫлөктө ишетеү ни тиклем ҡыҙыҡ та, көлкө лә булыуына ошо көндәрҙә баш ҡалала үткән "Шаяниум - 2021" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының финал уйындарына барыусы ҡала халҡы үҙе шаһит булды.**

Ун туғыҙынсы тапҡыр үткәрелгән "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының район этаптарында йәмғеһе 32, ҡала этабында 16 команда үҙ-ара көс һынашҡан. Ә инде финал уйындарында ярыштың бөтә этаптарында ла уңышлы сығыш яһаусы 14 команда ҡатнашты. Улар "Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы" йылы уҙғарылыуға арнап, "Хәрәкәттә - бәрәкәт" темаһына шаярттың һәм юмористик видеолар - вайндар күрһәтте.

**(Дауамы 2-се биттә).**




*Гран-при яулаусы "ХХ централ" командаһы.*

12+

АФАРИН!

# УЙЫНДА НИМӘ - ТЕЛЕНДӘ ШУЛ...

(Башы 1-се биттә).

Финал уйынында үҙҙәрен күптән танытып өлгөргән командалар сығыш яһаны һәм Өфөлә, дөйөм илдә барған хәл-ваҡиғалар менән хәбәрҙар, иң мөһиме, һәр нәмәгә үҙ ҡарашы булыуын раҫланы. Әлбиттә, көләмәстәрҙең тос өлөшө мәктәп тормошона, дистанцияла уҡыуҙың нескәлектәренә бәйле булды. Балалар интернет бәйләнеш өҙөлөп, уҡытыусыларын ишетмәй ҡалыуҙан да ҡыҙыҡ таба, дәрес мәлендә ашарға саҡырған өләсәйҙәрен дә мәрәкәләй, хатта карантин осоронда урамда кеше эҙләп маҙаһы бөткән серәкәйҙең хәлен дә күҙ алдына баҫтыра алды.

"Беҙҙең команда быйыл яңырҙы, барыбыҙ ҙа 6-сы синыфта уҡыйбыҙ һәм "Шаяниум"да беренсе тапҡыр уйнайбыҙ. Бына был Нәркәс Миниярова, Алтынай Ғәлийәнова, Айбулат Ҡоҙабаев, Айбулат Ғәлин, Илдан Мортазин һәм мин - капитан Кәрим Хөснуллин", - тип таныштырҙы үҙҙәре менән быйылғы уйындың Гран-приһын яулаған Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының "XX централ" квнсылары. Беренсе урын яулаған 48-се Башҡорт лицейының "Сәтәкәй" квнсылары былтырғы йәй эсендә "Путин бабай" ярҙамы менән бизнесменға әүерелеүҙәре тураһында хәбәр итте. Уҡыусылар араһында шаяндар һәм отҡорҙар ярышына нигеҙ һалынғандан бирле ысын ир-егеттәр юморын күрһәткән, тик егеттәрҙән генә торған команда булып танылыу яулаған "Башҡорттар.RU" рәтенә быйыл ике ҡыҙ ингән һәм улар М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы менән бергә икенсе урынға лайыҡ булды. Конкурста өсөнсө урынға Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатының "Рәссамдар" һәм Ғ. Ибраһимов исемендәге 2-се Башҡорт лицейының "Тағы ла "2" командалары сыҡты. Әйткәндәй, "Рәссамдар" бик шәп идея менән бүлеште: улар "Ҡурай-ТВ" каналы директоры, "Байыҡ" конкурсының етәксеһе Рита Өмөтбаеваға бейеүселәргә генә түгел, рәссамдарға ла иғтибар итергә һәм улар араһында "Мыйыҡ" конкурсын үткәрергә тәҡдим итте.

Белеүебеҙсә, "Шаяниум"да баш ҡаланың милли белем усаҡтарынан ғына түгел, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән мәктәптәрҙән дә уҡыусылар әүҙем ҡатнаша. Улар саф башҡортса һөйләшмәһә лә, телде яратып өйрәнеүен, башҡорт юморының нескәлектәрен тойомлай белеүен күрһәтә. Быйыл бындай командалар араһынан татар телен тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 25-се белем биреү үҙәгенең "Беҙ 25-тәр" командаһы хәтерҙә ҡалды: үҙҙәре әйтмешләй, тиҙ генә тактиканы үҙгәрткәс, уларҙың Елена Бәпесовалары башы ауыртҡандарға ҡурай моңон тыңларға, тамағы ауыртыуға зарланғандарға шәп "ингалятор" - ҡурайҙа уйнарға кәңәш итеп торҙо. Әйткәндәй, "Шаяниум - 2021" конкурсының "Иң шәп ҡыҙ" номинацияһында Спорт профилле 5-се республика мәктәп-интернаты "Interспорт" командаһынан Гөлиә Ғабдрафиҡова, ә "Иң шәп егет" тип 4-се мәктәптең "Затонград" командаһынан Альберт Ҡотоев танылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҡыусы балаларҙың уйында нимә - уйынында ла шул булды. Уларҙың эскерһеҙ мәҙәктәре, тапҡыр сәпәгән һүҙҙәре, тос фекерҙәре тиҫтерҙәрен дә, тамаша ҡылған ололарҙы ла уйландырмай ҡалмағандыр, моғайын. Әлбиттә, уларҙың һәр береһе еңеүгә өмөтләнгәндер. Әммә конкурс булғас, барыбер ҙә иң-индәр юғарыраҡ күтәрелә. Ә шулай ҙа ошо юҫыҡта баһалама комиссияһына ҡарата ҡайһы бер тәҡдимдәр бар: улар бала күңеленең бик һиҙгер булыуын, бирелгән баһаның ғәҙел булыу-булмауын тиҙ тойоуын һәр саҡ иҫтә тотһондар ине.**

Камила ҒӘЛИЕВА.

БЫЛ АЙҘА...

# ИЗГЕ РАМАҘАН ТЫУА

**"Мартта - шарт та шорт..." тигәне раҫ килде былай, һәр хәлдә, буранай эстафетаны шаҡайҙан ҡабул итеп алған тәүге көндәрҙә. Әлеге әйтемдең икенсе яртыһы - "... апрелдә - шапыр ҙа шопор" тигәне нисек булыр?**



Көн торошона ҡағылышлы ошондайыраҡ һорауҙарға бөгөн бер кем дә: донъя күргән аҡһаҡалдар ҙа, махсус белемле синоптиктар ҙа ышанысլы ғына яуап бирә алмай. Бына бит килде замана... Шулай булмай: һауа торошоноң нигеҙен тәшкил иткән экология һәләкәт алдында: әле тегендә, әле бында һыу баҫа, ғүмере ҡойон күрмәгән төбәктәрҙә дауыл ағастарҙы тамырынан йолҡа, Антарктидала мәңгелек боҙ ҡаялары, айсбергтар ирей, ҡайҙалыр ҡоролоҡтан ер ярыла... Ниңә донъя халыҡтары ниндәйҙер Трамп йә Навальный кеүек персонаҙарҙы түгел, ә Еребеҙҙе яҡлап урамдарға сыҡмай, шауламай икән? Календарь битендә йылына бер иҫкә алыныусы Бөтөн

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәғлүм булыуынса, ришүәт алған кеше генә түгел, биргән кеше лә енәйәтсе. Ә һеҙ ришүәт биргәнегеҙ бармы?*

***Ләйсән ВӘЛИЕВА, Күгәрсен районы:*** Ришүәт һорағандары булды, әммә биргәнем юҡ... тиһәм, дөрөҫ булырмы икән? Икенсе ҡыҙым тыуғас, бер айҙан медицина тикшереүе үткәйнек, врач уның йөрәгендә ниндәйҙер тайпылыш бар, тигән һығымта яһаны. Шунан алып төрлө белгестәргә йөрөү башланды. Бер йәш тулғансы, асмаған ишек, тапамаған тупһа ҡалманы, тиһәң, бер ҙә арттырыу булмаҫ, моғайын.

Бер шулай үҙебеҙҙең район дауаханаһы йүнәлтмәһе менән республика ҡалаларының береһенә тар белгескә күренергә килдек. "Күстәнәс алып бар, тиҙерәк үтеп сығырһың", - тип иҫкәрткәйнеләр инде. Бер банка яңы айыртылған ҡаймаҡтан башҡа бер нәмә лә ала алманым, сөнки баланы ла күтәрергә кәрәк. Ул ваҡытта памперстар юҡ, береһенә - ҡоро, икенсеһенә еүешләнгән йүргәктәр, ползункиҙар һалынған ике пакетты ла тотаһы бар. Сират һыу буйы һымаҡ булмаһа ла, йәш бала менән көтөүе ауыр бит. Күрше районнан килергә тейешлекте беләләр ине инде, саҡырып индерҙеләр. Инеү менән врач та, медсестра ла икеһе лә минең ҡулдағы пакеттарға төбәлде. Күстәнәс өмөт иткәндәрен тәнемдең бөтә күҙәнәктәре менән тойҙом. Хатта үҙемә уңайһыҙ булып китте. Медсестра ымлап ҡына пакеттарҙы икенсе бүлмәгә ҡуйырға ҡушты. Яйлап, яҡшылап ҡаранылар, "Ауырыу тарихын" да ентекле өйрәнеп, тейешле дауаһын да тәғәйенләнеләр. Баламды урап, рәхмәт әйтеп сығайым тиһәм, теге йүргәктәр һалынған пакеттарымдың береһе лә юҡ. Мин бала менән булғансы, медсестра бер нисә тапҡыр теге бүлмәгә сығып ингәйне инде. Икенсе урынға ҡуйҙымы икән, тип һораһам: "Ул ауыл күстәнәсе түгел инеме ни?" - тине аптырап. Шул тиклем оялдым, үҙемдең белдекһеҙлегемдән түгел, ә уларҙың шул ҡылығынан ныҡ уңайһыҙ хәлдә ҡалғайным. Бүлмәләге иң төпкө шкафтан алып сығарып бирҙе ул төйөнсөгөмдө. Оялышымдан бер банка ҡаймаҡты бирергә лә онотоп сығып киткәнмен.

Студент ваҡытындағы шундай бер ваҡиға ла иҫкә төштө әле. Ситтән тороп уҡып йөрөйөм. Өйҙә бер түгел ике бала көтөп ултырғас, имтихандарҙы алдан биреп, тиҙерәк ҡайтыу яғын ҡарайһың бит инде. Бер уҡытыусы кемдең йәш балалары бар, әҙер булһағыҙ, алданыраҡ бирһәгеҙ ҙә була, тине. Уның "ҡулы таҙа" түгел икәне тураһында һүҙ йөрөй ине инде студенттар араһында. Беҙ бер нисә ҡыҙ һөйләштек тә, "бүләк" әҙерләргә булдыҡ. Үткән быуаттың 90-сы йылдары башы. Магазин кәштәләре буш саҡ, аҙыҡ-түлек, шул иҫәптән араҡы ла талонға ғына бирелә. Шулай, тегенән-бынан, өҙөп-йолҡоп, бер шешә коньяк, ыҫланған колбаса, бер ҡап кәнфит һалынған пакет тотоп, имтиханға киттек. Барғансы ҡыҙҙар менән: "Пакетты мин бирмәйем, һин бирәһең", - тип бәхәсләшеп барҙыҡ. Мин тотоп индем дә, өҫтәлгә терәп, иҙәнгә ҡуйҙым. Бына өсөбөҙ ҙә имтиханды тапшырҙыҡ, "зачетка"ларҙа тейешле билдәләр ҙә тора. Әммә теге күстәнәсте сығарып бирергә бер беҙҙең дә баҙнатыбыҙ етмәне.

Тороп сыҡтыҡ та киттек. Кемдең өлөшөнә эләккәндер инде был ул заман өсөн дефицит ризыҡтар. Бәлки, ришүәт алып өйрәнгән фән кандидаты, үрҙә атап үткән медсестра кеүек, алдан уҡ танауы ҡысып, һиҙеп ултырғандыр, беҙ сығып китеү менән ҡулына ла эләктергәндер. Уныһы миңә билдәһеҙ. Әммә ошо йәшемә етеп, шуны аңланым, ришүәтте биреү өсөн дә һәләт кәрәк икән. Ниндәйҙер файҙа күрәйем тип, башҡа улай "бүләк" тотоп йөрөргә тура килмәне, шөкөр. Бөгөнгө көндә нимәгә өлгәшкән булһаҡ, барыһы ла хәләл көсөбөҙ менән атҡарылған.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда уҙған тәүлектә COVID-19 йоҡторғандар һаны 1110-ға артҡан, хәҙер уларҙың дөйөм һаны - 31 817-нән ашыу. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 345 кешенең, икәүһенең һуңғы тәүлектә ғүмере өҙөлгән. Пневмония менән ауырыусылар 143 кешегә артҡан. Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә 4,493 миллионға яҡын сирле асыҡланған, әлеге ваҡытта 4,109 миллиондан ашыу кеше һауыҡҡан. Ошо ваҡыт эсендә 96,6 меңдән ашыу кеше вафат булған, уларҙың 393-ө - һуңғы тәүлектә.

✔Өфө ЭКСПО Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә 31-се тапҡыр "АгроКомплекс" һәм Агросәнәғәт форумы Халыҡ-ара махсуслаштырылған күргәҙмәһе булып үтте. Сараны РФ Ауыл хужалығы министрлығы ярҙамында БР Хөкүмәте, Ауыл хужалығы министрлығы һәм Башҡортостан күргәҙмә компанияһы ойоштorҙо. Был юлы сарала Рәсәйҙең 37 төбәгенән 310 компания ҡатнашты.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 31-се "АгроКомплекс-2021" халыҡ-ара күргәҙмәһен асыу тантанаһында телекүпер режимында яңы производствоға старт бирҙе. "Акрос РБ" компанияһы республикала ауыл хужалығы техникаһы өсөн запас частар һәм агрегаттар сығарыу буйынса яңы етештереү цехын асты. Яңы цех Өфө районында урынлашҡан. Проектты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә предприятиела 30 эш урыны булдырылған.

✔Башҡортостанда коронавирустан 130 пунктта прививка эшләтергә мөмкин. Өфөлә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында асылған мобиль вакцинация пункты эш көндәрендә көндөҙгө сәғәт 3-тән киске 8-гә тиклем эшләй. Шулай уҡ вакцинациялау пункттары Өфөлә - "Мега", "Планета", "Башҡортостан" лайф-стайл сауҙа үҙәктәрендә, Стәрлетамаҡта - "СитиМолл" сауҙа үҙәгендә, Белоретта, Дәүләкәндә, Күмертауҙа, Мәләүездә, Нефтекамала, Йылайыр, Иглин, Языково, Фёдоровка, Кушнаренко, Үрге Йәркәй ауылдарында ойоштorола.

✔Башҡортостанда табипҡа яҙылыу өсөн берҙәм номер үҙгәрә. Быйыл 1 апрелдән Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Бәйләнеш үҙәге берҙәм 1301 номерын 122-гә үҙгәртә. Ҡыҫҡа номерға шылтыратыуҙарға тариф билдәләнмәй. Әйткәндәй, әлеге ваҡытта республикала йәшәүселәрҙең белгестәргә регистратурала, ҡабул итеү барышында, мәғлүмәт киоскы, телефон йәки интернет аша яҙылыу мөмкинлеге бар.

**✓ Беҙ тейешле ҡанундарҙы белмәгәс, вазифалы кешеләр рәхәтләнеп бюрократик кәртәләр ҡуя, үҙҙәренә ҡулай түләүҙәр булдыра. Власть органдары структураһын белмәүебеҙ сәбәпле, ул беҙгә ҡатмарлы булып күренә.**



донъя Ер көнөндә **(22)**, исмаһам, планета халыҡтары бергәләшеп теләктәшлек белдереп алһындар ине.

Экологик һәләкәт күренештәрен ҡайҙандыр алыҫтан эҙләргә лә түгел, үҙебеҙҙең Башҡортостан һауаны зарарлы ҡалдыҡтар менән бысратыу буйынса Рәсәйҙә 7-се урында тора, тип хәбәр иткәйне яңыраҡ "Башинформ" агентлығы. Ә инде Волга буйы федераль округы буйынса - беренсе урында хатта. Яғыулыҡ-энергетика комплексы, нефть сығарыу һәм эшкәртеү, нефть химияһы һәм электр энергетикаһы предприятиелары айырыуса "тырыша" икән был йәһәттән. Бигерәк тә Өфө, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларында тирә-яҡ мөхитте бысратыу индексы - 3, йәғни, бик түбән. Бында шулай уҡ ҡала транспорты бүлеп сығарған ҡалдыҡ газдарҙы ла ҡушһаң, битлек түгел, противогаз кейеп йөрөргә генә ҡала. Роспотребнадзор Башҡортостанда атмосфераны ағыулаусы иң бысраҡ ҡалаларҙы атаны. Уларҙа экологияның бысраныу кимәле ПДК-нан күпкә юғары булыуы хаҡында Өфөләге Экология форумында Роспотребнадзорҙың коммуналь гигиена буйынса күҙәтеү бүлеге начальнигы Лариса Кильдюшова һөйләне. Мәҫәлән, Дәүләкәндә һауаның бысраныу кимәле ПДК-нан 3,75 проценттан артып китә. Салауат ҡалаһында һауаның этилбензол менән бысраныу кимәле башҡа ҡалаларға ҡарағанда иң юғарыһы - 9,4 процент, хлорбензол Благовещенда - 15 процент, формальдегид Стәрлетамаҡта - 4,62 процент, гидроксибензол Өфөлә - 2,7 процент. Былтыр республикала 14 төрлө зарарлы химик берләшмәләр менән атмосфераның бысраныуы иң сикке норманан юғары булған.

Бөтөн донъя сәләмәтлек **(7)** көнөндә был хаҡта әйтеп китмәй булмай: ҡалаларҙағы бысраҡ һауа менән унда йәшәүселәрҙең һаулыҡ торошо араһында туранан-тура бәйләнеш бар, тип иҫбатлай Роспотребнадзор эксперттары. Сөнки тап ошо ҡалаларҙа тын юлдары сирҙәре йылдан-йыл арта бара. Өфөлә, мәҫәлән, тын юлдары ауырыуҙары беренсе урында тора, ти улар. 2015 йылда был сир өләшөнә 20 процент осраҡ тура килһә, 2019 йылда был күрһәткес 44 процентҡа барып еткән. Стәрлетамаҡта иһә шуға ярашлы 41 һәм 45 процент тәшкил итә. Өҫтәүенә, Кроношпан тирәләй тағы ығы-зығы ҡупмаҡсы. Халыҡтың әүҙем ҡаршылығына ҡарамай төҙөлгән был завод тирә-яҡ мөхиткә үлемесле ағыуын сәсә лә башланы. Тәбиғәттән файҙаланыуҙы күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт былтыр Кроношпанға тирә-яҡ мөхиткә зыяны буйынса беренсе категория биргәйне, ләкин предприятие быны менән ризалашманы. Март урталарында тәбиғәттән файҙаланыуҙы күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт, Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәтенең республика идаралығы һәм төбәк прокуратураһы ҡатнашлығында заводта тикшереү эштәре башланды.

Беҙҙең илдә, айырыуса ҡалаларҙа, көнкүреш мәҙәнилек кимәленең дә бик түбән булыуы экология файҙаһына һөйләмәй. Әле булһа бит көнкүреш ҡалдыҡтары, сүп-сарҙы айырып йыйыу ғәҙәткә индерелә алмай һаман да. Ҡытайҙа бергә уҡыған япон студентының ҡылығын һөйләгәйне ҡыҙым. Ҡалай банкалы һыу алып эсә лә, йоҡа ҡалайҙы ҡулдарында шытырҙатып йомарлағас ҡына сүп һауытына ташлай. Бәктиһәң, был уларҙың ғәҙәтенә ингән. Шулай итһәң, бындай һауыттар сүп моҡсайында күп урын алмай. Киләсәктә беҙҙең балалар ҙа сүп-сарҙы айырып йыйыу буйынса шундай тәртипкә өйрәнер, бәлки?

Халыҡ-ара мәҙәниәт шулай уҡ Экологик белем көндәре **(15)** айҡанлы әйтеүем. Өфө мәктәптәрендә "Өфө Эко йүнәлешендә" тигән дәрестәр индереләсәк, тиҙәр бит. 1-11 кластарҙа ғына түгел, балалар баҡсаларында ла хатта. Был дәрестәрҙә экологик белем биреү менән бергә балаларҙы һаҡсыллыҡҡа, таҙалыҡҡа, сүп-сарҙы айырып йыйырға өйрәтмәкселәр икән. Ҡайһы бер мәктәптәрҙә хәҙер файҙаланылған батарейкаларҙы йыйыу буйынса экобокстар, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтарҙы туплау буйынса контейнерҙар урынлаштырылған. Мәҙәнилек сифаттары, изгелек, яҡшы ғәмәлдәр, бер-береңә илтифатлыҡ, ғөмүмән, тормошобоҙҙа һәм айырыуса ошо айҙарҙа киң таралыу алһын ине.

Изге Рамаҙан айы **(13)** тыуа бит, ҡәрҙәштәр, Ураҙа башлана. Был көндәр Ислам диненда айырыуса изге, теләктәр һәм доғалар ҡабул була торған мәл - Тәңребеҙҙең иң яратҡан һәм иң яҡшы тип иҫәпләгән айы. Ураҙа ашау-эсеүҙәрҙән тыйылып тороу ғына түгел, ә кешене төрлө ҡотҡоларға бирелеүҙән, гонаһ ҡылыуҙарҙан һаҡлап тороусы тәрбиә мәҙрәсәһе. "Телегеҙҙе яман һәм гонаһлы һүҙҙәрҙән һаҡлағыҙ, тыйылған нәмәләргә күҙ һалмағыҙ, ишетмәҫкә тейешле нәмәләрҙе тыңлап йөрөмәгеҙ. Мохтаждарға саҙаҡа таратығыҙ, ата-әсәләрегеҙҙе хөрмәт итегеҙ, балаларға кеселекле булығыҙ, ҡәрҙәшлек бәйләнештәрен ныҡытығыҙ", тип әйтелә был хаҡта вәғәздәрҙә.

Был айҙа тағы ла Көлкө һәм Халыҡ-ара ҡоштар **(1)** көндәре, Халыҡ-ара балалар китабы **(2)**, Тәфтишсе, Халыҡ-ара өҫтәл теннисы **(6)**, Һыу аҫты кәмәһендә һәләк булғандарҙы иҫкә алыу, Бөтөн донъя сәләмәтлек **(7)** көндәре, Авиация һәм космонавтика көнө. Юрий Гагариндың йыһанға осош яһауына 60 йыл **(12 апрель 1961)**, Башҡортостан халыҡтарының милли кейемдәре көнө **(16)**, Халыҡ-ара цирк **(17)**, Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар **(18)**, Рәсәй полиграфияһы, РФ мәшғүллек хеҙмәте, Умырзая **(19)** көндәре, Рәсәй доноры **(20)**, Урындағы үҙидаралыҡ, Баш бухгалтер **(21)** көндәре, Инглиз теле, Бөтөн донъя китап һәм авторлыҡ хоҡуғы **(23)**, Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек, Халыҡ-ара ветеринар табип **(24)** көндәре, Ҡыҙҙар көнө **(25)**, Радиация һәләкәттәрендә ҡорбан булғандарҙы иҫкә алыу **(26)**, Рәсәй парламентаризмы, Нотариус көндәре **(27)**, Бөтөн донъя хеҙмәт хәүефһеҙлеге **(28)**, Халыҡ-ара бейеү **(29)**, Янғын һағы **(30)** көндәре билдәләнә.

**Алағарайҙа тыуғандар:**

**1** - тарихсы, партия эшмәкәре, тарих фәндәре кандидаты, РФ һәм БР Журналистар берлеге ағзаһы **Ғиҙетдин Ирғәлинға - 90 йәш** (1936).

**4** - башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир, публицист, ғалим **Ғарифулла Кейековтың тыуыуына - 160 йыл** (1861 - 1918).

**10** - башҡорт шағиры, мәғрифәтсе, балалар яҙыусыһы, тәржемәсе **Сафуан Яҡшығоловтың тыуыуына - 150 йыл** (1871 - 1931).

**16** - телсе-ғалим, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Әкрәм Биишевтың тыуыуына - 95 йыл** (1926 - 2003).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## *ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

### ? *Мәғлүм булыуынса, ришүәт алған кеше генә түгел, биргән кеше лә енәйәтсе. Ә һеҙ ришүәт биргәнегеҙ бармы?*

**Рәмилә ЙӘҒӘФӘРОВА, Еҙенсура районы:** Бөгөн, йәшерен-батырыны юҡ, "Кул - ҡулды, ҡул битте йыуа", тигән лозунг аҫтында йәшәйбеҙ.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, танышлыҡ, "йөнтәҫ ҡул" ярҙамын бик һирәктәр генә ҡулланмайҙыр, минеңсә. Уныһы ла намыҫы ҡушыуы буйынса түгел, ә танышы булмауы сәбәпле генә, тип уйлайым. Коррупцияны иҫкәртеү, уға ҡаршы көрәшеү йәһәтенән республикала етди эш алып барылһа ла, йәмғиәтебеҙ өсөн был хәүефле күренеш йәшәүен дауам итә. Тап ошо ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, танышлыҡ арҡаһында иҡтисадыбыҙ ҙа аҡһай, сөнки предприятиеларға белгестәр һөнәре буйынса түгел, ә күберәк танышлыҡ менән эшкә урынлаша. Компетенцияға тура килмәгәс, билдәле инде, уның эшен башҡа кеше эшләй, ике йәки бер нисә кешенең бурысын бергә атҡарған хеҙмәткәрҙең иһә эшенең сифаты аҡһарға ла мөмкин. Шулай итеп, был кире күренеш туранан-тура дөйөм эш күрһәткесендә сағыла.

Ата-әсәләр йыйылышына, врачҡа, берәй белешмә юллап башҡа ведомстволарға барғанда, сумкаһына бер ҡап кәнфит булһа ла һалып йөрөмәгән кеше бик аҙ хәҙер. Кӱстәнәсһеҙ барһаң, хатта һөйләшеп тә булмай бит ул. Быны беҙ үҙебеҙ, әлбиттә, ришүәт бирәбеҙ икән, тип тә уйламайбыҙ. Алған кеше лә эшләгән эше, ярҙамы өсөн рәхмәт белдереү сараһы ғына тип ҡабул итәләр. Әммә тап ошо һәр кем кӱстәнәс йөрөтөү арҡаһында кешенең һөрсеһе арта бит инде. Һөҙөмтәлә, шулай итеп, ришүәтселәрҙе үҙебеҙ булдырабыҙ. Шул сәбәпле, бөгөн кем күберәк бирә, шуның һүҙе үтә, эше эшләнә. Закон буйынса, беҙ биргән кәнфиттен, кофе йәки коньяктың хаҡы ришүәтселеккә, бәлки, инмәйҙер ҙә, әммә беҙ етәкселәрҙе бүләк алырға йәтәшләндерәбеҙ.

Күптән түгел интернетта ошо темаға һорау алыуҙың йомғаҡтарын күреп ҡалғайным. Унда, мәҫәлән, Башҡортостан халҡының 18 проценты бер тапҡыр булһа ла эшендә ришүәт биргән, тиген һүҙҙәр бар ине. Бында һорау алыуҙа ҡатнашҡандар ғына ингәндер, ә унда ҡатнашмағандар күпме? Бына, мәҫәлән, минең үҙемә лә ҡайһы бер йомоштарымды йомошлар өсөн кәрәк кешене "майлағаным" булды. Бынан утыҙ йыл элек отпускыны йәй көнө алыр өсөн етәксемдә ғаиләһе менән бергә мунсаға саҡырып, ҡунаҡ итеп, бүләк биреп ҡайтарғайным, ялымды үҙем теләгән ваҡытта алырға насип булды. Юғиһә, гел ҡышҡы ваҡытҡа тура килә торғайны.

Яңы йыл, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар йәки Ватанды һаҡлаусылар көнө кеүек сираттағы иҫтәлекле даталар айҡанлы, бында, әлбиттә, тыған көн, юбилей тураһында һүҙ бармай, хеҙмәткәрҙәрҙән етәксегә айырым аҡса йыйыуҙы ла мин килешмәгән күренеш, тип иҫәпләйем. Шуның менән уның күңелен күрергә тырышыу, тип аңлайым. Минең элекке эшләгән урында ошо йола йәшәй ине: һәр кем береһенән-береһе уҙҙырып, бер кемгә лә күрһәтмәй генә, етәксегә бүләк бирҙе. Шулай итеп ҡотлағандарға ул нисектер мәрхәмәтлерәк, йомартыраҡ була торғайны. Йәшермәйем, мин үҙем дә бүләк биргәнем булды, сөнки башҡаларҙан кәм булғым килмәне. Ғөмүмән, ришүәтселек - беҙҙең, үҙебеҙҙең, закондарҙы, хоҡуҡтарыбыҙҙы аңламау, белмәү, сәйәси институттарҙың камил булмауы арҡаһында килеп сыҡҡан кире күренеш ул. Беҙ тейешле ҡанундарҙы белмәгәс, вазифалы кешеләр рәхәтләнеп бюрократик кәртәләр ҡуя, үҙҙәренә ҡулай түләүҙәр булдыра, хаҡтарҙы арттыра. Власть органдары структураһын белмәүебеҙ сәбәпле, ул беҙгә ҡатмарлы булып күренә. Уны һәр кем енел үтергә теләп, вәкәләтле кешеләргә бүләк-кӱстәнәс әҙерләй. Был тәңгәлдә тейешле контролдең булмауы тап ошо коррупцияның сәскә атыуына килтерә лә инде.

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә Инвестициялар йәлеп итеү үҙәге булдырыла, тип хәбәр итте Башҡортостандың беренсе вице-премьеры һәм Иҡтисади үҫеш министрлығы етәксеһе Рөстәм Моратов. Былтыр төбәк кимәлендә ошондай штаб булдырылғайны. Мәскәүҙәге "Welcome Bashkortostan" инвестициялар йәлеп итеү үҙәге, тәү сиратта, туризмды үҫтереү, Рәсәй һәм сит ил инвесторҙарын эҙләү, уларҙың проекттарына ярҙам итеү менән шөғөлләнә, тине вице-премьер.

✓2020 йылдың ноябре - 2021 йылдың ғинуары йомғаҡтарына ярашлы, Башҡортостан эшһеҙлек кимәле буйынса төбәктәр рейтингында 36-сы урынды алды. Был хаҡта "РИА Новости" хәбәр итте. Башҡортостанда эшһеҙлек кимәле артып, 5,6 процент тәшкил итте. Уҙған йылдың өсөнсө кварталында республикала эш эҙләүҙең уртаса ваҡыты - 5,9 ай булған.

✓Башҡортостанда февралдә мотор яғыулығына ҡулланыусылар хаҡы, маркаһына ҡарап, уртаса 10-46 тингә артты. Мәҫәлән, февралдә АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 43,40 һумға тиклем ҡиммәтләнде (ғинуарҙа - 43,11 һум). АИ-95 маркалы бензиндың хаҡы бер айҙа 46,14 һумдан 46,41 һумға, АИ-98 бензинының - 52,33 һумдан 52,79 һумға, дизель яғыулығының литры 47,91 һумдан 48,01 һумға тиклем күтәрелде.

✓Пегас йондоҙлоғонда Аҡбуҙат йондоҙо барлыҡҡа килде. Милли киң мәғлүмәт саралары ассоциацияһы тарафынан Рәсәйҙең иң яҡшы этник баҫмаларының береһе тип танылған "Аҡбуҙат" журналы нәшер ителеүгә 30 йыл тулыу уңайынан йондоҙға ошондай исем бирелде. Ҙурлыҡы буйынса ун бишенсе күк есеме хәҙер башҡорт халҡы эпосындағы ҡанатлы ат исемен йөрөтә. "Аҡбуҙат" журналы редакцияһы сертификат менән бүләкләнде.

✓Быйыл Башҡорт дәүләт аграр университеты тағы ла үҙ майҙанында ауыл һәм бәләкәй ҡалалар мәктәптәренең 5-11 класс уҡыусылары араһында "АгроНТИ-2021" Бөтә Рәсәй конкурсын үткәрәсәк. Унда ҡатнашыу өсөн 31 майға тиклем kids.agronti.ru сайтында теркәлергә кәрәк. Енеүселәргә аграр университетҡа ингәндә 5-тән алып 10-ға тиклем балл өҫтәләсәк. 1 апрелдән 16-на тиклем конкурста ҡатнашырға теләүселәр ситтән тороп үткәреләсәк этапта үҙ көсөн һынап ҡарай ала.

***✓ Идеологик һәм психологик йоғонтоға тиҙ бирелгәндәре өсөн генә түгел, шулай уҡ енәйәт яуаплылығына тарттырылмауы өсөн дә балаларҙы төрлө провокацияларҙа файҙаланалар. Нимәгә йәлеп ителеүҙәрен үҫмерҙәр үҙҙәре белмәй.***



ҠЫҪҠАСА

# ҺУҒЫШ ОСОРО БАЛАЛАРЫНА...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай "Башҡортостанда һуғыш осоро балалары тураһында" закон ҡабул итте.** "Дәүләт Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға, тыл хеҙмәтсәндәренә ҙур иғтибар бүлә. Әммә һуғыштан һуңғы осорҙоң барлыҡ ауырлыҡтарын балалар ҙа татыған... Һуғыш осоро балаларына махсус хоҡуҡи статус биреү, уларға социаль ярҙам күрһәтеү - был кешеләрҙең илебеҙ үҫешенә өлөш индереүен таныу ул. Башҡортостанда бындай граждандар һаны 189 меңдән ашыу иҫәпләнә", - тине Константин Толкачев. Һуғыш осоро балалары тип 1927 йылдың 22 июненән 1945 йылдың 3 сентябренә тиклем тыуған һәм республика территорияһында даими йәшәгән граждандар иҫәпләнә, уларға республика бюджетынан бер тапҡыр бирелә торған түләү, медицина учреждениеларында хеҙмәтләндерелеү һәм стационар социаль хеҙмәтләндереү ойошмаларына путевканы сиратһыҙ алыу мөмкинлеге бирелә.

✓ **Башҡортостан мал аҙығын Европаға һатыу күләмен арттырҙы. Был хаҡта республиканың Ауыл хужалығы министрлығында хәбәр иттеләр.** Ведомство белдереүенсә, төбәктән май экстракция предприятиелары быйылғы йылдың тәүге ике айында 300-ҙән ашыу тимер юлы вагоны көнбағыш төпрәһен һәм гранулалы шротты экспортҡа оҙатты. Дөйөм алғанда, Шишмә май сығарыу заводы һәм Күмертау элеваторы Латвия һәм Литваның диңгеҙ порттарына 22 тоннанан ашыу үҫемлек сығышлы мал аҙығы оҙатты. Улар Балтика буйынан артабан Европа илдәренә китәсәк. Атап әйткәндә, көнбағыш төпрәһе һәм шрот Германияла, Бельгияла һәм Евросоюздың башҡа илдәрендә сусҡа, һыйыр, ҡош һәм балыҡҡа ашатыу өсөн файҙаланыла. Был аҙыҡ өҫтәмәләре шулай уҡ ҡатнаш аҙыҡ етештереүҙә кәрәкле компонент иҫәпләнә. Ғөмүмән, төбәктә сит илгә экспорт буйынса май продукцияһы дөйөм күләмдең 56 процентын тәшкил итә.

✓ **Ишле ғаиләләргә һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ер участкалары 2011 йылдан бирелә башланы, бөгөнгә 44 меңдән ашыу ер участкаһы бүленгән.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылда "Ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" Башҡортостан законына индерелгән үҙгәрештәр ишле, шулай уҡ балиғ булмаған инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә, бушлай ер алыу өсөн иҫәптә торғандарға һайлау - бер тапҡыр түләнә торған 250 мең һум аҡса йәки ер участкаһы алыу мөмкинлеге бирелде. Республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская Дәүләт Йыйылышының аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу комитеты ултырышында 2020 йылға республика бюджетынан граждандарға бер тапҡыр бирелгән аҡсалата түләү тураһында 200 таныҡлыҡ өсөн 50 миллион һум бүленеүе хаҡында һөйләне. Ағымдағы йылдың 1 ғинуарына 200 таныҡлыҡтың 160-ы тапшырылған. Тағы 40 ғариза муниципаль берәмек хакимиәттәрендә. Быйыл халыҡтың льготалы категорияларына бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү өсөн 400 таныҡлыҡҡа 100 миллион һум ҡаралған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "АЛҒА" АЛҒА АЛЫП БАРА

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров үткәргән "Транспорт сәғәте" тематик онлайн-кәңәшмәһендә "Алға" берҙәм транспорт картаһы проектын үҫтереү, шулай уҡ автомобиль юлдарын төҙөү һәм ремонтлау буйынса миҙгел эштәренә әҙерлек мәсьәләһе тикшерелде.**

Башҡортостан социаль карталар регистры генераль директоры Руслан Нурғәлиев белдереүенсә, республикала 1 миллион самаһы "Алға" картаһы сығарылған, уға транспортта ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеүҙең 50 проценты тура килә. 2019 йылдың июленән алып республика халҡы "бәхетле сәғәт" акцияһы буйынса бер сәғәт ваҡыт эсендә башҡа транспортта бер үк билет менән бушлай йөрөй ала һәм барлығы 2,9 миллион кеше был мөмкинлектә файҙаланған. Шулай итеп пассажирҙар дөйөм алғанда транспортта йөрөүгә 56 миллион һум экономиялаған. "Алға" картаһы проектының тотороҡло үҫешен "Уҡыусы картаһы" форматында мәғариф өлкәһендә лә күрергә мөмкин. Уның буйынса уҡыусыларҙың белем биреү учреждениеһына килеүе, мәктәп ашханаһында һәм буфетында туҡланыуы теркәләп бара. БР-ҙың цифрлы үҫеш министры Геннадий Разумикин һыҙҙаренсә, төбәктең социаль өлкәһе үҫештең киләһе этабы булып тора: "Алға" картаһы буйынса театрҙар, музейҙар, концерт залдары, шулай уҡ сауҙа һәм хеҙмәтләндереү өлкәһе ойошмаларында ташламалар алырға мөмкин буласаҡ. Хеҙмәтләндереү өлкәһе киңәйһә, проект "Алға Башҡортостан" картаһы тип аталасаҡ. Радий Хәбиров та уның халыҡ өсөн уңайлы һәм файҙалы, халыҡтың ихтыяжына йүнәлтелгән булырға тейешлегенә баҫым яһаны.

# БАЛАЛАР ТУҠЛАНЫУЫ...

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә мәктәптә туҡланыу тармағы һәм был хеҙмәтте күрһәткән бәләкәй, урта эшҡыуарлыҡ субъекттарының эшмәкәрлеген статистик күҙәтеүҙе ойоштороу мәсьәләләре буйынса фекер алыштылар.**

БР Премьер-министры Андрей Назаров мәктәптәрҙәге туҡланыу сифаты Республика Башлығының айырым күҙәтеүендә булыуын белдерҙе. Шулай уҡ муниципаль берәмектәрҙә был эш өсөн яуаплы кешеләр билдәләнгән һәм улар рационды көн һайын тикшереп тора. "Кәңәшмәләрҙә тикшереү һәм төрлө саралар күреү һөҙөмтәһендә беҙ хәлде яҡшыртыу мөмкинлеге алдыҡ. Уҡыусыларҙың туҡланыу режимын һаҡлауы һәм графигы буйынса системалы контроль булдырылған. Ризыҡтың сифатын лабораторияла тикшереү эше яйға һалынған. Ризаһыҙлыҡ белдергән мөрәжәғәттәр һаны кәмеүгә ҡарамаҫтан, улар һаман да бар әле", - тине Премьер-министр.

БР Хөкүмәтенең Премьер-министр урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов республиканың дөйөм белем биреү ойошмаларында туҡланыу сифатын күтәреү сараларына менән таныштырҙы. Әлеге ваҡытта 1934 белем биреү ойошмаһында 392 экобуфет эшләй. Вице-премьер уларҙа шәкәр, тоҙ, байытылған май кислоталары күләмен кәметеү мөмкинлеген ҡарарға тәҡдим итте. Экобуфеттарҙа урындағы етештереүселәрҙең тауарына өҫтөнлөк биреү күҙаллана. Бынан тыш, туҡланыу сифатын күтәреү буйынса саралар шулай уҡ мәктәптәрҙең әлеге ваҡытта 63 процентҡа туҙған аҙыҡ-түлек блоктары ҡорамалдарын яңыртыуҙы ла күҙаллай. Мәктәп туҡланыуын ойоштороу, уның сифаты буйынса мониторинг системаһын эшләү һәм индереү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта ҡыҙыҡһыныусы министрлыҡтар контроль тикшереү нөктәләре һәм мәрәй системаһы буйынса баһалама бланкылары эшләгән.

# ИМЕНЛЕК ҺАҒЫНДА

**Башҡортостандың Дәүләт Думаһы депутаттары экстремистик күренештәрҙе, терроризм идеологияһын таратыуҙы иҫкәртеү, үҫмерҙәрҙе рөхсәт ителмәгән сараларҙа ҡатнашырға йәлеп итеүҙе туҡтатыу кеүек яңы йүнәлеште балиғ булмағандар эше буйынса комиссияға закон менән нығытырға планлаштыра.**

"Һуңғы айҙарҙағы ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар был проблема асыҡ саралар үткәргәндә лә бик актуаль булыуын күрһәтте. Бындай хәл, бер яҡтан, илдең сәйәси тотороҡлолоғонда кире сағылыш ала, Рәсәйҙең территориаль бөтөнлөгөнә хәүеф янай, икенсе яҡтан, закондың эшмәкәрлеккә йәлеп итеп, балаларҙың яҙмышын боҙа, - тине Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Идеологик һәм психологик йоғонтоға тиҙ бирелгәндәре өсөн генә түгел, шулай уҡ енәйәт яуаплылығына тарттырылмауы өсөн дә балаларҙы төрлө провокацияларҙа файҙаланалар. Нимәгә йәлеп ителеүҙәрен үҫмерҙәр үҙҙәре, әлбиттә, белмәй. Әммә бик тиҙҙән, енәйәт яуаплылығы билдәләнер йәшкә еткәс, ошо уҡ ҡылыҡтары өсөн ҡаты яза биреләсәк".

Парламент рәйесе фекеренсә, балиғ булмағандар эше буйынса комиссияның эшмәкәрлеген киңәйтеү, балаларҙы рөхсәт ителмәгән митингыларға, пикеттарға йәлеп итеүгә ҡаршы көрәшкә иғтибарҙы көсәйтеү һөҙөмтәле иҫкәртеү эшен алып барырға булышлыҡ итәсәк.

# ДӘҮЛӘТ ДУМАҺЫНА...

**"Берҙәм Рәсәй" РФ Дәүләт Думаһына һәм башҡа кимәлдәге һайлау кампанияларына һайлауҙарға исемлектәр төҙөү өсөн кандидаттар һайлап алыу буйынса процедура башланы.**

Март уртаһынан кандидаттар алдан тауыш биреү сайтында теркәлә башланы. 29 апрелгә тиклем "Берҙәм Рәсәй" ҡатнашыусыларҙың анкетаһын ҡабул итәсәк, ай дауамында кандидаттар кампания алып барасаҡ. Тауыш биреү 24-30 майҙа электрон формала үтә. Һайлаусылар Дәүләт хеҙмәте порталы аша раҫланасаҡ. Ҡайһы бер төбәктәр - нигеҙҙә интернет тотороҡло эшләмәгән урындарҙа - был процедураны оффлайн үткәрәсәк. Бының өсөн уларға федераль ойоштороу комитетына мөрәжәғәт итергә кәрәк буласаҡ. Бындай шарттарҙа тауыш биреү 30 майҙа ғына үтәсәк. "Процедура барышының кемдең сәйәси дәғүәселеккә әҙер булыуы асыҡланасаҡ. Алдан тауыш биреүҙә кем еңә - шул һайлауҙа ҡатнашасаҡ", - ти Андрей Турчак.

Әйткәндәй, 19 сентябрҙә РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙан тыш, һигеҙ губернатор, 39 төбәктең закондар сығарыу йыйылыштары һәм 11 административ үҙәк депутаттары һайланасаҡ. Һуңғы исемлек "Берҙәм Рәсәй" партияһының июндең беренсе яртыһына планлаштырылған съезында төҙөләсәк. Партия етәкселеге кандидаттар составының яртыһының тиерлек яңырыу ихтималлығын белдерә.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Сит ил граждандары булған йә иһә гражданлығы булмаған миллләттәштәребеҙ Рәсәй граждандары менән бер рәттән юғары белем алырға хоҡуҡлы. Юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү кампанияһы башланыр алдынан Сит илдә йәшәгән ватандаштар менән эш итеү программаһы сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы вуздары уҡырға инеү мәсьәләләре буйынса онлайн-осрашыуҙар уҙғара. YouTube платформаһында ойошторолған сараларҙа юғары уҡыу йорттары вәкилдәренә үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙар менән мөрәжәғәт итергә мөмкин буласаҡ.

✓Өфөлә федераль әһәмиәттәге дүрт археология ҡомартҡыһының һаҡлау сиге раҫланды. Уларҙың барыһы ла "иртә тимер" дәүеренә - беҙҙең эраға тиклем 1-се мең йыллыҡ, беҙҙең эраның яҡынса V быуатына ҡарай. "Ручейное", "Воронки", Дудкино 1 торалҡтары, Ҡариҙел тамағы ҡаласығы өсөн хәҙер айырым режим булдырыла, йәғни улар һәйкәлдәрҙе һаҡлауҙы күҙаллай, был территорияларҙа капиталь төҙөлөш, ер эштәре, реставрация эштәренән тыш, алып барыу тыйыла.

✓Өфө янында йәшәүселәр бик йыш электр энергияһы һүндерелеүгә зарлана. Быға ауылдарҙың тулыһынса газ менән тәьмин ителмәүе йәки яңынан-яңы йорттар төҙөлөүе һөҙөмтәһендә селтәрҙәргә көсөргәнештең артыуы сәбәп булып тора. Ут һүнеү, уны ҡабаттан тоташтырыу көнкүреш техникаһының боҙолоуына килтереүе лә ихтимал. Әгәр милекселәрҙең тәьминәт ойошмаһы менән туранан-тура килешеүе бар икән, был осраҡта улар зыянды ҡаплатыуҙы һорап, ошо ойошмаға мөрәжәғәт итә ала.

✓Өфө инженер селтәрҙәре урамдағы люктарҙы тикшерҙе. Бөгөн предприятие балансында дүрт меңдән ашыу люк иҫәпләнә. Бик йыш люк ҡапҡастарын металлолом йыйыусылар урлай, ҡар таҙартҡанда махсус техника уны урынынан ҡуҙғатыуы ихтимал, шулай уҡ һыуыҡ көндәрҙә асарбаҡтар йылылыҡ камераларын йөклау өсөн файҙалана һәм һуңынан ҡапҡасын ябып китергә онота. Былар барыһы ла граждандар өсөн хәүеф тыуҙыра. Асыҡ люк күргәндә, 112 йәки 246-37-33; 246-37-27; 235-48-00; 8-965-935-4-888 номерҙарына шылтыратып хәбәр итергә кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Былтырҙан индерелгән яңылыҡ - милли кейемде презентациялау конкурстың иң күркәм этабы булды. Быйыл уны конкурсанттар үҙҙәренсә асты, бер-береһен һис ҡабатламаған сығыштар ҡарап ҡыуандыҡ.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ*

# УҠЫТЫУСЫЛАРҒА...

## рәхмәтле булайыҡ!



**Ошо көндәрҙә баш ҡалалағы "Торатау" Конгресс-Холл бинаһында педагогтарҙың иң мәртәбәле һөнәри конкурстарына йомғаҡ яһалды. "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" һәм "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурстарында барлығы 198 һөнәр эйәһе ҡатнашҡан.**

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында республиканың төрлө райондарынан һәм Ырымбур, Силәбе, Ҡурған өлкәләренән 53 педагог һынау тотто. Быйылғы конкурстың үҙенсәлеге тип шуларҙы атарға мөмкин: уҡытыусылар онлайн бәйләнеш ярҙамында матбуғат конференцияһында ҡатнашып, фекер алышты һәм ата-әсәләр йыйылышы уҙғарҙы. "Былтырҙан индерелгән яңылыҡ - милли кейемде презентациялау конкурстың иң күркәм этабы булды. Тәүге йыл ауырыраҡ та тойолғандыр, ә быйыл уны конкурсанттар үҙҙәренсә асты, бер-береһен һис ҡабатламаған сығыштар ҡарап ҡыуандыҡ. Был төр һынау киләсәктә лә мотлаҡ булырға тейеш, сөнки педагог унда уҡытыусы ғына түгел, рухлы шәхес булараҡ та асыла, мәҙәни кимәлен дә күрһәтә, телебеҙгә һәм йолаларыбыҙға һөйөү уята", - тине конкурс хаҡында баһалама ағзаһы Мәрхәбә Дәүләтшина. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы һөҙөмтәләренә килгәндә, лауреаттар исемлегенә Стәрлетамаҡ ҡалаһы Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия уҡытыусыһы Светлана Тимерғәлиева, М. Гәрәев исемендәге башланғыс осоуға әҙерләүсе Өфө дөйөм белем биреү мәктәп-интернатынан Фәнилә Фәтхетдинова, Дүртөйлө ҡалаһы Н. Нәжми исемендәге башҡорт гимназияһынан Руфина Камалова, Өфө ҡалаһы М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейынан Рима Яруллина инде. Конкурстың еңеүсеһе тип Өфө районы Дорогино ауылы А. Пикунов исемендәге мәктәп уҡытыусыһы Таңсулпан Сәйфетдинова танылды. Таңсулпан Рәмил ҡыҙы 26 йыллыҡ оҙон хеҙмәт юлын үтеүгә ҡарамаҫтан, һөнәри конкурста тәүге тапҡыр ҡатнаша. "Бик тулҡынландырғыс, көсөргәнешле барған конкурсты рух байрамы тип әйтергә мөмкин. Бер яҡтан, коллегаларым тәжрибәһе менән хайран ҡалдырһа, икенсе яҡтан, конкурс һынауҙарында аралашҡан төрлө белгестәр, ата-әсәләр менән фекер алышыу фәһемле булды минең өсөн. Ата-әсәләр менән "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән" темаһына бик матур һөйләштек", - тип тәьсораттары менән уртаҡлашты еңеүсе.

Шулай уҡ йомғаҡлау тантанаһында "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсының һәм уның сиктәрендә уҙғарылған "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы", "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы", "Йылдың йәш уҡытыусыһы" еңеүселәре, төрлө номинациялар һәм махсус приздар алыусылар ҙа тәбрикләнде. Әйткәндәй, йәш педагогтар араһында Өфөнөң 3-сө гимназияһынан физика уҡытыусыһы Петр Белобородов иң юғары баһаға лайыҡ булды. Ә бына "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" тигән почетлы исем Благовещен ҡалаһының 3-сө мәктәбе башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Зинера Ибәтуллинаға бирелде. Был конкурсанттар араһынан Рәсәй кимәлендә Башҡортостандың данын яҡлау хоҡуғын абсолют еңеүсе - Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаттың рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Лилиә Муллағәлиева алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йыл да уҙғарылған һөнәри конкурстарға яңынан-яңы көстәр килеп тороуы Башҡортостандың педагогик потенциялы ҙур булыуы хаҡында һөйләй. Был юлы ла тәжрибәле, оҙон хеҙмәт юлы үткән оло быуын уҡытыусылары менән бер рәттә дәрт-дарманы ташып торған йәш кадрҙар барлығын күрҙек. Улар барыһы ла заман менән бергә үҙгәрә алған, алдынғы ҡарашлы һәм төплө белемле, рухлы шәхестәр. Балаларыбыҙҙың аң-белемен, донъяға ҡарашын формалаштырған, күңеленә кешелектең мәңгелек төшөнсәләре тураһында орлоҡ һалған шундай уҡытыусыларыбыҙ булыуына рәхмәтле булырға ғына ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# МӘСКӘҮҘӘ...

## Башҡортостан төҫтәре



**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы онлайн-кәңәшмә хакимиәт башлығы Сергей Грековтың Мәскәү ҡалаһына ҡылған сәфәре һөҙөмтәләре менән таныштырыуҙан башланды.**

РФ Мәғариф министрлығында үткән осрашыу һөҙөмтәһе буйынса ул: "ВЭБ ("Внешэкономбанк" Рәсәй дәүләт корпорацияһы) программаһы буйынса мәктәптәр төҙөү мәсьәләһе ҡаралды. Беҙ был исемлеккә 13,5 мең урынға мәктәптәр төҙөү ғаризаһы менән индек һәм 2022 йылда тапшырыласаҡ мәктәптәр исемлегенә эләгергә тейешбеҙ. Бының өсөн апрелдә РФ Мәғариф министрлығына барлыҡ документтарҙы тапшырырға бурыслыбыҙ. Ваҡыт ҡыҫа, беҙ барлыҡ ҡыҙыҡһыныусы ойошмаларҙың тырышлығына ярҙам итеү өсөн ошо эш менән шөғөлләнгән проект төркөмөн йыябыҙ", - тип белдерҙе.

Шулай уҡ Сергей Грековтың Мәскәү ҡалаһының вице-мэры, транспорт департаменты етәксеһе Максим Ликсутов менән осрашыуында ла мөһим мәсьәләләр ҡарала, шул иҫәптән ер өҫтө пассажир транспорты һәм юл хәрәкәтен ойоштороу; велоинфраструктураны проектлау; түләүле парковкалар булдырыу; вертолет инфраструктураһын проектлау, транспорт-күсеп ултырыу урындарын ойоштороу. Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Мәскәү Метрополитены поездарының береһен Башҡортостан Республикаһы һәм Өфө ҡалаһы төҫтәре менән брендларға тәҡдим иткәйне. Максим Ликсутов был идеяны хуплаған.

Кәңәшмәнең көн тәртибенә килгәндә, унда башҡа темалар менән бер рәттән, төп иғтибар яҙғы ташҡын мәсьәләһенә лә бүленде. Ташҡын баш ҡаланың барлыҡ райондарына ла янай, әммә бигерәк тә Дим, Калинин, Киров, Ленин райондары ҙур хәүеф аҫтында. Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов әйтеүенсә, барлыҡ әҙерлек эштәре Ағиҙел йылғаһында һыу иң юғары нөктәгә - 900 сантиметрғаса күтәрелеү ихтималынан сығып башҡарыла. Ленин районы территорияһында әле ташҡынға ҡаршы биш штаб эшләй, эвакуацияланған халыҡты урынлаштырыу өсөн 1050 кешелек 13 пункт булдырылған.

Кәңәшмәлә шулай уҡ граждандарға хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәр буйынса эш эҙләүҙә ярҙам күрһәтеү мәсьәләһе лә ҡаралды. Был хаҡта Өфө ҡалаһының Халыҡ мәшғүллеге үҙәге директоры Ридан Ахьямов сығыш яһаны. Бөгөнгә ведомствола 23 мең вакансия бар, был былтырғы менән сағыштырғанда 4,2 меңгә күберәк. Бигерәк тә коммуналь һәм шәхси хеҙмәт күрһәтеү, күсемһеҙ милек операцияларын башҡарыу, төҙөлөш, сауҙа, эшкәртеүсе сәнәғәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм транспорт тармаҡтарында эшселәр етешмәй. Быйыл 4463 кешене яңы һөнәргә уҡытыу күҙаллана, әле 477 кеше уҡый. Ҡыҫҡаһы, хеҙмәт баҙарындағы һорауҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн эшсе ҡулдар әҙерләнә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Сельдерей

Сельдерей дөйөм тонусты күтәрә, бөйөрҙәр эшмәкәрлеген, аппетитты һәм ҡан әйләнешен яҡшырта. Селдерейҙың тамыры, япрағы һәм орлоғонан шифалы төнәтмәләр яһайҙар.

❖ Холецистит, подагра, кесерткән биҙгәге, бөйөр һәм бауыр, шулай уҡ өҫкө тын алыу юлдары ауырыуҙарынан сельдерей тамыры төнәтмәһен ҡулланалар. Уны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ ваҡлап туралған яңы сельдерей тамырына 300 мл ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алдан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Арығанда, витамин етешмәгәндә, организмдың дөйөм тонусын күтәреү маҡсатында 2 балғалаҡ ваҡланған сельдерей тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө тирәһе эҫе төнәтмәне ашарҙан алда эсергә.

❖ Метеоризмдан һәм эсәктәр насар эшләүҙән арыныу, ашҡаҙан һутының кислоталылығын күтәреүгә сельдерей япрағынан әҙерләнгән төнәтмә ярҙам итә. Бының өсөн 3 ҡалаҡ киптереп ваҡланған япраҡтарға (йәки 6 ҡалаҡ яңыһына) 1 литр һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Һөҙөп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

## Тире ауырыуҙары

❖ Арпа, һыҙлауыҡ (фурункул), күпертке, герпес, эренле шештәрҙе гөлбаҙран (пижма) дауалай. Ашағандан һуң киптерелгән гөлбаҙран "борсағының" яртыһын ғына сәйнәп, аҙағынан һыу эсергә. Көнөнә 3 тапҡыр шулай итергә. Ғәҙәттә, бер нисә көндән ауырыуҙар юҡҡа сыға, әммә гөлбаҙран менән 21 көн дауаланырға кәрәк. Ошо осорҙа ҡан таҙара, иммунитет көсәйә һәм бындай ауырыуҙар оҙаҡ йылдарға онотолор. Иғтибар: йөклө ҡатындарға һәм балаларға ҡулланырға ярамай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ "Һөйөү" тигән нәмә борон бөтөнләйгә булмағанмы икән әллә? Ғөмүмән, ундай нәмә донъяла бармы? Булған хәлдә, мөхәббәтле никах менән ҡауышҡандарҙың да яртыһынан күбеһе ни өсөн ҡабаттан айырылыша һуң?..



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Йөн эшкәрткәндә, төрлө туҡыма әҙерләүҙә башҡорттарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре Евразияның төрки малсылары: ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, нуғайҙар, балҡарҙарҙыҡына оҡшаш була. Һарыҡ йөнөн махсус ҡайсы ярҙамында ҡырҡҡандар. Ҡул менән иләп, орсоҡ менән сиратҡандар (осона ауырайтҡыстар һирәк ҡуйылған). Туҡығандан һуң изделиеларға эҫе һыу ҡойоп тығыҙлағандар. Аҡ тула юғары баһаланған. Туҡыма һуғыу ҡатын-ҡыҙҙың ҡул эше булып иҫәпләнгән. Туҡыманы бер үк әйберҙәр эшләүгә тотонғандар, тәү сиратта өҫ кейеме - сәкмән теккәндәр. Уның өсөн туҡыманы ябай туҡыма ысулы менән тар ғына итеп һуҡҡандар. Бөтә осраҡтарҙа ла арҡыры урынағас (горизонтальный стан) ҡулланғандар. Әммә башҡорт урынағасы Урта Азия һәм Ҡаҙағстан һарыҡсыларының ҡул станының ҡайһы бер үҙенсәлектәрен һаҡлаһа ла, уларҙан айырылып торған; башҡорт урынағасы Көнсығыш Европаныҡына яҡын булған.

Башҡорттар, ҡаҙаҡтар һәм Урта Азияның күпселек башҡа халыҡтарынан айырмалы рәүештә, кесерткән һәм киндер кеүек сүсле ҡыр үләндәренән дә еп әҙерләгән. XVIII быуатта был оҫталыҡ киң таралған булған. Башҡорттарҙың үҫемлектән еп һәм туҡыма етештереүе тураһында И.И. Лепехин, П.С. Паллас, И.Г. Георги яҙып ҡалдырған.

И.И. Лепехин П.И. Рычковтың Сирмешән йылғаһы буйында урынлашҡан Спасский ауылындағы усадьбаһында булған сағында ерле башҡорттан кесерткәнде нимә өсөн ҡулланыуҙары, нисек эшкәртеүҙәре тураһында тулы мәғлүмәт яҙып алып ҡалған. Эштә кесерткәндең ике төрө ҡулланылған: ябай һәм "япраҡтары тәпәй кеүек булғаны"; һуңғыһына өҫтөнлөк бирелгән. Дымлы ерҙәрҙә кесерткән күп үҫкән, хатта кешенең күкрәк тапҡырына еткән. Кесерткәнде эшкәртеү ҡатмарлы булмаған: "Кесерткән өлгөрһә, ... уны бер ҡул менән һабағынан тотоп, аяҡ менән төбөнә тибеп, йолҡоп алалар. Кәрәк тиклем йыйғас, һабаҡтарын һындырып ташлайҙар һәм йүкә һыҙырған кеүек ҡабығын һыҙырып алалар. Шуны киптереп, талҡыуыста талҡыйҙар һәм эш өсөн ҡулланалар". П.С. Паллас та Ырымбур - Өфө юлында йыйған мәғлүмәттәренә таянып, кесерткән эшкәртеүҙе яҡынса шулай һүрәтләгән: "...көҙгөһөн киндер кеүек йолҡоп алалар, киптерәләр, шунан ебетәләр, һабаҡтарын ҡул менән йолҡоп сығалар, ҡабығын һыҙырып алалар һәм иң һуңында йомшарғансы ағас килелә төйәләр". Бында яңылышлыҡ киткән: киндерҙән айырмалы рәүештә, кесерткәнде ебетмәгәндәр, ҡайһы бер саҡ уны эшкәртерҙән алда ҡайнар һыу менән бешеп алғандар.

Академик экспедицияларҙа ҡатнашҡан И.Г. Георги, И.И. Лепехин, П.С. Паллас хеҙмәттәрендә кесерткәндән һуғылған туҡыма киндерҙеке менән бергә телгә алына, хатта ҡайһы саҡта башҡорттар тәүгеһенә өҫтөнлөк тә биргән: "Туҡыманы улар күберәк кесерткәндән һуға, ҡайһы осраҡта тарма сүсенән (киндер сүсе шулай аталған); әммә гел үтә ҡалын һәм тар була"; "Кейемлек ҡалын туҡыманы улар күпселек үҙҙәре һуға, сөнки епте тарма сүсенән генә түгел, ябай ҙур кесерткәндән дә әҙерләйҙәр". Күренеүенсә, ваҡыт үтеү менән кесерткән туҡыманы киндер алмаштырған. Тормош тәжрибәһе башҡорттарҙы "кесерткән туҡымаһына ҡарағанда сифатлыраҡ" булған киндер туҡыманы юғары баһаларға өйрәткән, тип билдәләй И.И. Лепехин; шуға күрә улар киндерҙе күп йыйып ҡына ҡалмай, сәсеп үҫтерә лә башлай. Шул уҡ ваҡытта XIX быуат дауамында таулы ерҙәрҙә һәм урыны-урыны менән Урал аръяғы ауылдарында һәм йәйләү ерҙәрендә күп үҫкән ҡыр киндерен ҡулланғандар.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# "ТОҠ ЭСЕНДӘГЕ БЕСӘЙ" ХАҠЫНДА ФӘЛСӘФӘ

**Ҡасандыр, мәктәп йылдарында уҡ дуҫлашып, тора-бара бер-береһен өҙөлөп яратып йөрөгән таныштарымдың өйләнешеүе хаҡында ишетеп ҡыуанғайным. Бер нисә йыл торғас, ғаиләләрендә ығы-зығы башланып, ахырҙа, айырылышыуҙары хаҡында хәбәрҙар булып, уларҙы ныҡ ҡына йәлләнем.**



Икеһенең дә фәҡәт ыңғай яҡтарын ғына хәтерләйем. Ҡыҙ - уҡыу алдынғыһы, өлгөлө тәртипле лә ине. Башҡалар менән дә мөләйем мөнәсәбәттә, ярҙамсыл, төҫкә лә һылыу ғына. Ғөмүмән - яҡшы ҡыҙ. Егет тә алдынғы спортсы, тыныс холоҡло. Бер һүҙ менән әйткәндә - бынамын тигән! "Ир-арыҫлан" тип тә атайҙар ундай егеттәрҙе. Уларҙың шундай "эскерһеҙ мөхәббәт"енә күптәр көнләшеп ҡарай ине. Әммә... уртаҡ балалары ла булыуына ҡарамаҫтан, башҡалашҡандар. Бындай хәл бер кемде лә ғәжәпләндермәҫ, тип уйлайым, сөнки был - хәҙерге тормошобоҙҙа ифрат та ғәҙәти күренеш. Мәҡәләне уҡып ултырған һәр кеше ошоға оҡшаш бихисап миҫал килтерә аласаҡ. Ә ни өсөн "ғәҙәти" икән ул?

Берәүҙәр шунда уҡ әлеге мин әйткән айырылышыусылар тураһында: "Уларҙың ата-әсәһе кемдәр һәм ниндәйерәк кешеләр булған? Бәлки, тоҡомдары әллә ни шәптән булмағандыр?" - тип һораша башлар. Башҡа ауылдарҙан килеп, ҡала мәктәбендә уҡыған әлеге Мөғлифә, Батыр бер-береһенең ата-әсәһен бөтөнләйгә белмәй ине. ЗАГС-ҡа барырҙан бер нисә көн элек кенә таныштырҙылар. Ике яҡтың да ата-әсәһе - яғымлы ҡайны-ҡәйнәләр егеткә лә, ҡыҙға ла тәү күреүҙән оҡшаны. Буласаҡ кейәү менән килен дә ата-әсәләрҙең күңеленә хуш килде. Икеһе лә һөйөү утында янған йәштәр бер-береһенең ата-әсәһе хаҡында шунан артығын белмәнеләр һәм белергә лә теләмәҫ инеләр.

Икенселәр шундай шиккә төшөр: "Бәлки, ир хәмер менән мауығып киткәндер, йә эшләмәй өйҙә ятҡандыр? Айырылышыуҙарына ошо сәбәпсе булғандыр..." Юҡ. Улай ҙа түгел. Әрме хеҙмәтен тамамлап, "ыздарауай егет" булып ҡайтҡан Батырҙың да, кәләшенең дә эшһөйәрҙәр икәнен беләм. Һәр ҡайһыһы үҙенә ҡулайлы эш табып, ярайһы ғына яҡшы аҡса эшләп, хатта тиҙ арала фатир ҙа алып, яңы тормош башланы улар. Балалары ла тыуҙы.

Өсөнсөләр иһә: "Бәлки ир ситтә "гүляйть" ҡылғандыр, ә кәләш уны көнләшкәндер?" - тиәсәк. Улайҙыр тип тә уйламайым, был хаҡта бер ни ҙә ишетелмәне. Электән белеүемсә, егет ифрат та етди булырға тейешле ине... Бына шулай: икеһе лә яҡшы, әммә, тормоштары емерелгән!

... Мин ошондай хәл-ваҡиғалар тураһында ишеткәндә йыш ҡына, ә бер-береһен алдан бөтөнләйгә тиерлек белмәгән-күрмәгән көйө ғаилә ҡорған боронғо ата-бабаларыбыҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ нисек бергә ғүмер иткәндәр икән, тип уйлана башлайым. Башлыса башҡалар димләүе буйынса ғына танышып, никах кисендә генә осрашҡан егет менән ҡыҙ ирле-ҡатынлы булып, ҡартайғансы, хатта гүргәсә бергә булғандар ҙа баһа. Айырылышыу осраҡтары ла булмаған тиерлек! Әллә күпмешәр бала-саға ла тәрбиәләп үҫтергәндәр. Бер-береһенә "атаһы", "әсәһе" тип хөрмәтләп өндәшкән бындай парҙарҙың күпселегенең уйына никах емереү тигән нәмә хатта инеп тә сыҡмаған. Әсәйем мәрхүмә һөйләүе буйынса, ирҙән айырылып, атай йортона кире ҡайтҡан осраҡтар әүәле булмаған тиерлек. Булһа ла булғандыр инде, әлбиттә, әммә, әлеге әйтмешләй, был ғәҙәти хәлгә әйләнмәгән! Ҡыҙына "таш булып бат", тип теләк теләп оҙатҡан ата-әсәһе. Һыуға ташланған таштың ҡабаттан йөҙөп сыҡмаҫын һәммәбеҙ яҡшы белә. Тап ана шуға оҡшатырға тырышҡан кеше борон кейәүгә оҙатҡан ҡыҙын. Кейәүҙән айырылып ҡайтыу ғәйәт ҙур хурлыҡҡа һаналған. Ҡыҙҙар-килендәр ҙә был хаҡта бик яҡшы белгән. Ошондай рух бәләкәйҙән өләсәйҙәребеҙҙең ҡанына һеңгән, күрәһең... Тағы кемдер "Был бит бик боронғо замандарҙа ғына булған", тиер. Әммә бөгөнгө көндә лә, хатта минең яҡын таныштарым араһында ла бер-береһен элек белмәгән ҡыҙҙарҙы килен, егеттәрҙе кейәү итеп алып төҙөлгән ғаиләләр күп кенә. Әллә нисәшәр бала үҫтереп, уларҙы уҡытып, бынамын иттереп, бик күптәргә өлгө булып, деү теттереп донъя көтөп ята улар. Бер уйлаһаң, ысынлап та сәйер: бөтөнләйгә белмәгән-күрмәгән кешең менән тиҙ генә таныша һалып, нисек итеп ғүмер буйы бергә йәшәмәк кәрәк? Ә мөхәббәт?.. Йырсыларыбыҙ данлап йырлаған, шағирҙарыбыҙ бөйөктәргә сөйгән "һөйөү" тигән нәмә борон бөтөнләйгә булмағанмы икән әллә? Ғөмүмән, ундай нәмә донъяла бармы? Булған хәлдә, мөхәббәтле никах менән ҡауышҡандарҙың да яртыһынан күбеһе ни өсөн ҡабаттан айырылыша һуң?.. Ысын мөхәббәт, бәлки, ғаилә ҡорғас ҡына тыуалыр?..

Ысынлап та, һигеҙенсе синыфта уҡыған ҡарпыш ҡолаҡлы малай менән бумала баш ҡыҙыҡай араһындағы бер-береһенә булған йылы мөнәсәбәтте нисек атарға? Үҫеп етеп, беләгендә һәм башҡа урындарында көс ташып тороуын тойған егет менән "мине өҙөп ал", тип торған бешкән сейәләй матур йөҙлө, зифа буйлы ҡыҙ араһындағы бер-береһенә ылығыуҙы мөхәббәт тип атап буламы? Шундай ҡайнар тойғо кисереүселәр "мөхәббәт берәү генә була", бәғзеләре хатта "ул - мәңгелек" тип тә ебәрә. Әгәр улай икән, ни өсөн сикһеҙ һөйөү менән янған парҙар ҡауышҡандан һуң бер-береһен яратмай, хатта күралмай башлай? Һуңынан башҡа берәүҙе табып алып, тап элекке һымаҡ уҡ: "Мин тик һине генә яратам, йәнем! Һинән башҡа һөйөр кешем юҡ, ә тегеһеһе мауығыу ғына булған..." - тип, ҡасандыр кемгәлер әйткән һүҙҙәрен ҡабатлай. Әммә, оло үкенескә, бына шундай "мөхәббәтле" парҙар, оҙаҡламай бөтөнләй башҡаса "һайраша" башлай: "Былай булырынды белмәнем, белһәм - эргәңә яҡын да юламаған булыр инем. Мин һине бүтәнсә яратмайым", - тигән һүҙҙәрҙе бер-береһенә әйтешеп, инде "атай, әсәй" тип тәтелдәп торған алтындай балаларын сыр-сыу илатып, айырылышыу яғын яйлай, ысын мөхәббәттең бөтөнләйгә булмауы хаҡында гәп һата. Әле күптән түгел генә "һөйөү утында янған" был парҙы хәҙер "башҡаланып йәшәү хәйерлерәк" тигән уй кимерә. Ә был мәлдә... Ҡасандыр, бәлки, яҡындары аша ғына танышҡан, әлеге әйткәндәй, "димләп ҡауыштырылған" икенсе пар иң беренсе нәүбәттә балаларын хәстәрләп, шул ғәзиздәренә һөйөнөп, көңгөр-ҡаңғыр итеп, артабан донъя көтә. Үҙҙәре төҙөгән ҙур, матур ғына йорттары ла балҡып тора. Танышҡан, ҡауышҡан саҡта "һөйәм" тигән һүҙҙе лә әйтешмәгән был ир менән ҡатын араһында татыулыҡ, тыныслыҡ хөкөм һөрә...

Инаныуымса, бала саҡтан туғандары, ата-әсәһе, башҡа кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә булыу рухында тәрбиәләнеп үҫкән егет, ҡыҙ ҙа, бер-береһе менән ҡауышҡандан һуң үҙҙәрен ана шундай тормошҡа көйләй. "Өйләнештең икән, хәләл ефетеңдең һәр бер яҡшы яғын ыңғай баһалап, ниндәйҙер кире яғын күрмәҫкә тырышып, уға мөмкин тиклем ярарға ынтылып йәшәргә кәрәк", тигән инаныуҙа булған был пар ғүмер буйы бергә йәшәйәсәк! Йәшлектең тиҙ генә үтеп китерен, ғүмерҙең берәү генә икәнен яҡшы аңлаған бындай кешеләр үҙҙәренең балаларын да тап ана шундай рухта тәрбиәләйәсәктәренә иманым камил.

Әлеге "былай булырынды белмәнем..." тип әйтергә яратыусыларға ошондай һорау бирге килә: "Ә кемдең ниндәй булырын, йәғни алдағыны Аллаһнан башҡа тағы кем белә?" "Мөхәббәтле" никах ҡораһыңмы, әллә димләшеп өйләнешәһеңме, йә, урыҫтар әйтмешләй "по расчету" тигән ысул менән ҡауышаһыңмы - барыбыҙ ҙа (егет тә, ҡыҙ ҙа) "тоҡ эсендәге бесәй"ҙе алған кеше хәлендәбеҙ ҙә баһа. Беҙҙең яҡта әйтмешләй, "кешенең эсен ярап ҡарап булмай". Тик үҙең, балаларың бәхетле булһын тиһәң, ғаилә ҡорғас та бер-береңде еңеп алыу тигән уй бер ҡасан да башыңа килергә тейеш түгел. Ир - үҙенең, ә ҡатын кеше үҙ урынын белеп, тыныс ҡына йәшәп алып китеү хәйерлерәк. Бер-береңдең алдында булырға тейешле яуаплылыҡ тойғоһо иң тәүге планға сығырға тейеш...

Әйткәндәй, үҙем табип кеше булараҡ, ҡайсаҡ ғаилә тормошон хирургик операция барышы менән дә сағыштырам. Унда һәр кем үҙ эшен яҡшы белә. Операция яһаусы хирург, уның ассистенты, операция туташының һәр хәрәкәте теге йәки был операцияға ярашлы, гармоник рәүештә атҡарыла. Береһе лә үҙ фунцияһын икенсегә йөкмәтергә тырышмай. Хирург ҡулын һуҙыуы була, сестра уға кәрәк инструментты шунда уҡ тоттора һала. Ә ассистент, операция яраһын кәрәгенсә киңәйтеп, пациенттың эсәк һәм башҡа ағзаларын тотошоп, операция яһаусыға яҡшыраҡ күренһен өсөн, тейешенсә яҡҡа шылдырып, уның эшен еңеләйттереп тора. Хирургтың энә менән үткәргән ебен етеҙ генә хәрәкәттәр менән эләктерә һалып, уны шунда уҡ бәйләп тә ҡуя. "Һин шулайт, һин былайт", тигән һүҙҙәр ҙә булмай хатта улар араһында. Ситтән ҡарап торған кешеләргә бәғзе ваҡыт был өсәү уйнап торған һымаҡ ҡына тойола. Шул арала хирург бер-ике шаян һүҙ ҙә ҡыҫтырып ебәрергә өлгөрә әле...

...Шулай ҙа, башта иҫкә алған Батыр менән Мөғлифәгә матур йәшәү өсөн нимә етешмәгәнлеген үҙем дә аныҡ ҡына итеп аңлай алманым. Тормош юлдары ифрат та ҡатмарлы шул...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ ***1917 йылда Ваҡытлы Хөкүмәт тарафынан ойошторолған Бөтөн Рәсәй ауыл хужалығын иҫәпкә алыу ведомостарында Хаджи-Әхмәт Ишбулатовтың милләте башҡорт тип теркәлгән, аҫабалығы (вотчинник) ла күрһәтелгән.***



ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!

**XX быуат башында, Октябрь түңкәрелешенән һуң күп тә үтмәйенсә, Рәсәйҙә Граждандар һуғышы башлана, унда батша армияһында әүәл юғары вазифалар биләгән офицерҙар әүҙем ҡатнаша: ҡыҙылдар яғында (башлыса, хәрби белгестәр сифатында) ла, аҡ армия составында ла. Уларҙың күптәре хаҡында ғилми-публицистик, әҙәби әҫәрҙәр ижад ителгән, документаль һәм нәфис фильмдар төшөрөлгән. Әммә билдәле бер сәбәптәр арҡаһында иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалған, ә Граждандар һуғышынан һуң бөтөнләйе менән онотолоуға дусар ителгән хәрби эшмәкәрҙәр бар.**



# ГЕНЕРАЛ ЯҘМЫШЫ:

## Хаджи-Әхмәт Ишбулатов

Башҡортостан тарихында ла хәҙерге быуын кешеләре өсөн бигүк билдәле булмаған, әммә үҙ заманында дан үә хөрмәт ҡаҙанған шәхестәр була. Ундай арҙаҡлы заттар араһынан 1918 йылдың октябренән бирле Башҡорт республикаһы милли ғәскәренең төп хәрби көсө - Айырым Башҡорт корпусы командиры, генерал-лейтенант Хаджи-Әхмәт (Хажиәхмәт) Ишбулатовты атап әйтеп китергә кәрәк. Уның хаҡында һәр кем иркен таныша алырлыҡ мәғлүмәттәр күп түгел, был факт та ошо тарихи шәхес менән ҡыҙыҡһыныуҙы көсәйтә генә.

Уның тормошо һәм эшмәкәрлеге менән бәйле тарихи тикшеренеүҙәрҙә һәм публицистик материалдарҙа генералдың этник сығышын асыҡлауға ла ҙур иғтибар бирелә. Әйтелгәнсә, Ишбулатовтың биографияһын тулыраҡ кимәлдә өйрәнеү өсөн яңы мәғлүмәттәр табыуы ла еңелдәрҙән түгел. Шулай ҙа генералдың тыуған төйәге, туған-тыумасалары хаҡында билдәле булған ышаныслы материалдар бар, тап ошо мәғлүмәттәр уның ни сәбәпле башҡорт милли хәрәкәтенә үҙ ихтыяры менән ҡушылып китеүен дә аңларға ярҙам итә.

Ишбулатовтар (русса документтарҙа - Ижбулатовтар) шәжәрәһенә ярашлы, уларҙың ата-бабаларының береһе булған Нәҙер исемле кешенең улы XVII быуат аҙағында хәҙерге Благовар районы территорияһында, сарылы (сарылы) мең ырыуының аҫаба ерҙәрендә Өйҙәрәкбаш ауылына нигеҙ һалған. Риүәйәт буйынса, уға тиклем Нәҙер һәм уның атаһы Ишбулат хәҙерге Янауыл районына ҡараған Иткенә ауылында йәшәгән. Был ауыл уран башҡорттарыныҡы. Тимәк, Ишбулатовтар нәҫеленең дә уран ырыуы башҡорттарынан булыуы ихтимал, ә улар боронборондан тарихи яҙмаларҙа яугир халыҡ булараҡ телгә алына.

Ишбулатовтар нәҫеленең аҫаба башҡорт сығышлы булыуы тарихи документтарҙа сағылыш тапҡан. 1917 йылда Ваҡытлы Хөкүмәт тарафынан ойошторолған Бөтөн Рәсәй ауыл хужалығын иҫәпкә алыу ведомостарында Хаджи-Әхмәт Ишбулатовтың милләте башҡорт тип теркәлгән, аҫабалығы (вотчинник) ла күрһәтелгән.

XIX быуатта, башҡорттарҙың хәрби-казачий сословие статусында йәшәгән осоронда, абруйлы шәхес Нәҙер нәҫеленән булған Ишбулатовтар ҙа Башҡорт-мишәр ғәскәрендә төрлө кимәлдәге командирлыҡ чиндарына лайыҡ була. Хаджи-Әхмәт заманына күрә етеш тормошта йәшәгән, өс ҡатыны булған Исхаҡ Ишбулатовтың туғыһынсы улы булып, 1851 йылда тыуа. Буласаҡ генералдың атаһына 1814 йылда зауряд-сотник чины бирелһә, дүрт йылдан һуң ул поход старшинаһы вазифаһына лайыҡ була. Исхаҡ Ишбулатовтың хәрби карьераһына уның 1812-1814 йылдарҙа башҡорт полктары составында Наполеонға ҡаршы яуҙарҙа ҡатнашыуы ғына түгел, ә Рәсәй империяһы XIX быуатта ҡаҙаҡ жуздарын (административ өлкәләрен) ил составына ҡушыу маҡсатында ойошторған дипломатик миссиялар составына йәлеп ителеүе лә йоғонто яһағандыр.

Хаджи-Әхмәткә 7 йәш тулыуға уның 73 йәштәге атаһы вафат була. Ул үҙенең бер туған ағалары ҡарамағында ҡала. Күрәһең, хәрби хеҙмәткә хөрмәт менән ҡарау, уны ғүмерлек һөнәр итеп һайлау ошо ғаиләгә хас күренеш булғандыр: Хаджи-Әхмәттең өс ағаһы - Йыһангир, Шәйхислам һәм Мирхәйҙәр - шулай уҡ аталары юлынан китә. Улар барыһы ла Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә, Йыһангир сотник дәрәжәһенә етһә, уның ҡустылары урядник (унтер-офицер) чинында була. Әммә уларға артабан ғәскәри хеҙмәттән ҡәҙимге ауыл башҡорттары тормошона күсергә тура килә: 1863 йылда Башҡорт ғәскәре, тыныс тормош шарттарында уны тотоуға хәрби ихтыяж булмағанлыҡтан, ғәмәлдән сығарыла, башҡорттар хәрби сословиенан һалым түләүсе ирекле граждандар категорияһына күсерелә. Әлбиттә, батша армияһында офицер чинында карьера яһау өсөн йәштән үк махсус хәрби уҡыу йорттарында белем алыу талап ителә.

Ошо мөмкинлекте оҡуҙ уңында тотоп, Ишбулатовтар ғаиләһе йәш үсмер Хаджи-Әхмәтте Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусының Азия бүлегенә урынлаштыра (әйтергә кәрәк, бындай махсус уҡыу йорттарына ул заманда башҡорттар араһынан бик һирәктәр генә инә ала - бында, башлыса, дворян балалары ғына уҡый). Ул 1866 йылда, кадет корпуһын тамамлау менән хәрби училищеға уҡырға алына, уны ла тамамлағас, 18 йәшлек башҡорт егетен прапорщик званиеһында 30-сы Полтава пехота полкына ебәрәләр.

Шулай итеп, Хаджи-Әхмәттең оҙайлы хәрби хеҙмәт юлы башлана - ул, отставкаға сыҡҡансы, 37 йыл дауам итә. Был осорҙа - Рәсәйҙә батша Александр III хакимлыҡ иткән заманда - 1877-1878 йылдарҙа төрөктәргә ҡаршы бигүк оҙайлы булмаған кампанияны иҫәпкә алмағанда, хәрби бәрелештәр, оло һуғыштар булмай. Шуға күрә Х.-Ә. Ишбулатовтың карьераһы тыныс шарттарҙа уҙа, ул шәхсән хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашмай. Ул, хәрби хеҙмәт шарттарына ярашлы, үҙ ваҡытында тейешле званиелар ала, тырышлығы, үҙе командалыҡ иткән частарҙағы тәртип, дисциплина яҡшы булғанлыҡтан, юғары командованиенан бер ниндәй ҙә кисәтеү йәиһә шелтә алмай.

Батша армияһы полковнигы Х.-Ә. Ишбулатов 1908 йылда, 193-сө Ковель пехота полкы командиры вазифаһында хәрби карьераһын тамамлап, отставкаға сыға. Уға шул уҡ ваҡытта, ил алдындағы фиҙакәр хеҙмәтен баһалап, генерал-майор чины бирелә, шулай уҡ үҙ заманы өсөн бик юғары булған (3 120 һум) пенсия тәғәйенләнә.

Отставкаға сығыуҙан бер нисә йыл алдараҡ Хаджи-Әхмәт Бохара сауҙағәре Камалбай Йәҙгәровтың ҡыҙы Бибизәйнәпкә өйләнә, уларҙың бер-бер артлы ике улы, бер ҡыҙы тыуа: Сәйетгәрәй (1904), Рөстәм (1905), Миәссәр (1907). Отставкалағы башҡорт генералының тыныс шарттарҙа үткән етеш тормошо 8 йыл тирәһе дауам итә. Әммә 1914 йылда Беренсе донъя һуғышы башланғас, Рәсәй армияһының ҙур уңышһыҙлыҡтарға дусар булыуы арҡаһында тылда ил граждандарын хәрби хеҙмәткә әҙерләү зарурлығы тыуа, был эш өсөн хәрби белемле, тәжрибәле офицер кадрҙары кәрәк була. 1915 йылда генерал-майор Х.-Ә. Ишбулатов та хәрби хеҙмәткә яңынан йәлеп ителә. Тәүҙә ул 146-сы запастағы пехота батальоны командиры итеп тәғәйенләнә, ә 1916 йылдың апреленән Өфө губернаһының Бәләбәй ҡалаһында урынлашҡан 152-се запастағы пехота батальоны (артабан ул пехота полкы кимәленә еткерелә) командиры вазифаһында хеҙмәт итеүен дауам итә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**(Тарих фәндәре кандидаты Рөстәм Таймасов материалдары нигеҙендә әҙерләнде. Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал

"Халҡыбыҙҙың күренекле шағиры Рәшит Нигмәти ошо көндәрҙә генә Башҡорт дивизияһына арнап яҙылған "Үлтер, улым, фашисты!" тигән поэмаһын тамамлаған икән - Башҡорт академия драма театрының талантлы артисы, нәфис һүҙ оҫтаһы Бәҙәр Йосопова шағирҙан шул ялҡынлы әҫәрҙе һорап алып, ятлап, Урал һүҙе рәүешендә беҙгә килтереп еткергән. Билдәренә алмас ҡылыстарын тағып, ҡулдарына мылтыҡ һәм автоматтарын ҡыҫып тотҡан ҡырыҫ йөҙлө, аҙ һүҙле башҡорт яугирҙары гүзәл шиғри юлдарҙы, аҡлан түңәрәгендә тығыҙ балдаҡ яһап теҙелеп торған килеш, өнһөҙ ҡалып тыңланылар...

Талантлы һүҙ оҫтаһының ауыҙынан, әйтерһең, ил-әсә ораны яңғыраны, һәм ул үс алырға йөрәкһегән һуғышсыларҙы ҡулдарындағы ҡоралдарын тағы ла нығыраҡ ҡыҫып тоторға мәжбүр итте. Ә артистың күкрәк төбөнән сыҡҡан көр тауышы, хисторҙе урғылдырып, киң Дон далаларына таралды:

Ә блиндажда Шайморатов иптәш
Приговор яҙҙы кемгәләр...
Приговор шундай:
- Күпме йүкә,
Күпме шыршы булһа Уралда, -
Урал һәм Дон өсөн һуғышҡанда,
Тап шул хәтле дошман турарға!
Приговор шундай:
- Күпме табан,
Күпме суртан булһа һыуҙарҙа, -
Иҙел һәм Дон өсөн һуғышҡанда,
Тап шул хәтле дошман турарға!

Тылсымлы ошо шиғри юлдарҙан, һәр ике строфа тамамланған һайын, көллө аҡлан кинәт хәрәкәткә килде-ҡалтыраны - ҡындарҙан сығарып һурылған йөҙәрләгән ҡылыс, ҡояшта ялтлап, нәфрәт менән юғары күтәрелде, берҙәм күкрәктәрҙән гөрләп сыҡҡан көслө "ура!" ер менән күкте тетрәтте.

Майҙан уртаһына ҡурайсылар Ғ. Сарбаев, С. Сабитов һәм гармунсы М. Ғайсин сығып баҫты. Икһеҙ даланы шыңғырҙатып, күңелдәрҙе елкендергес башҡорт бейеү көйө яңғыраны. Шул минутта уҡ дивизия командиры М.М. Шайморатов егеттәрсә еңел хәрәкәттәр менән түңәрәкте әйләнгәс, ҡулынан һаҡ ҡына тотоп, майҙан уртаһына Бәҙәр Йосопованы алып сыҡты. Ҡара-ҡаршы төшөп, һалмаҡ ҡына бейей башлаған ыңғайға, икеһенең дә ҡүҙҙәре шаян осҡонланып, йөҙҙәрен бәхетле йылмайыу яҡтыртты.

Улар, бер минутҡа ғына һуғыш афәтен онотҡандай, ниндәйҙер еңеллек менән ҡанатланып-рухланып бейейҙәр. Был мәлдә, ошо икәүгә ҡушылып, бөтә яугирҙарҙың ярһыу йөрәктәре, әйләнәләге йәшел ҡыуаҡтар, ҡунаҡсыл ҡарт груша ағасы, Дон далаһы бейегәндәй тойолдо.

...Ҡояш, засадаға баҫырға ашыҡҡан һалдат һымаҡ, офоҡҡа төшөп бара... Ҡурайсылар яңғыратып Салауат маршын тартып ебәрҙе. Боронғо башҡорт атлыларының ҡаһарманлыҡ традицияларын намыҫ менән һаҡлаусы һәм үҫтереүсе Салауат тоҡомдары Тыуған ил өсөн, Ватан өсөн Сталинград эргәһендәге алышҡа данлы походҡа сығырға сафҡа баҫты. Алда беҙҙе тағы ла яңы һынауҙар, ҡанлы һуғыштар көтә ине.

Яуға инер алдынан ғына тағы ла бер шатлыҡлы хәлдә - 14 ноябрҙә М.М. Шайморатовҡа генерал-майор званиеһы бирелеүен байрам иттек".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Һатыуға сыҡҡанда ҡулығыҙҙа шәхси хужалыҡ тураһында мәғлүмәт күрһәтелгән белешмә булырға тейеш. Ошо белешмә нигеҙендә баҙар хакимиәтенән һатыуға рөхсәт ҡағыҙы алына.*



*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ЭШҠЫУАР БУЛЫУ ЕҢЕЛМЕ?



**Эшҡыуарлыҡ һәр заманда ла булған һәм буласаҡ. Башҡа өлкәләге кеүек үк, эшҡыуарлыҡтың да үҙ ҡыйынлыҡтары, һорауҙары һәм хәл итәһе мәсьәләләре бихисап. Алдына эшмәкәрлегенә бәйле һәм үҙе генә хәл итә алмаҫтай мәсьәлә килеп баҫҡан саҡта эшҡыуарға ҡайҙа мөрәжәғәт итергә? Юридик һорауҙарына тулы һәм аныҡ яуаптар нисек табырға? Ошо һәм эшҡыуарлыҡҡа бәйле башҡа һорауҙарға Башҡортостан Республикаһында эшҡыуарҙарҙың хоҡуҡын яҡлау вәкиллеге етәксеһе Флүр Минзаһит улы ӘСӘҘУЛЛИН яуап бирә.**

**Вәкиллиәт эшмәкәрлеге нимәгә ҡайтып ҡала?**

- Беҙҙең төп бурыс - республика эшҡыуарҙарының хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлау, уларға юридик ярҙам күрһәтеү. Башҡортостанда эшҡыуар йәки фермер булараҡ теркәлгән һәм эшмәкәрлек алып барған һәр кем үҙен борсоған һорауҙар менән беҙгә мөрәжәғәт итә ала. Бының өсөн электрон йәки Рәсәй почтаһы аша хат ебәрергә, йә шәхсән килергә була. Шулай уҡ ҡыҙыу телефоныбыҙ ҙа эшләй. Республиканың төрлө төбәгенә сығып та эшҡыуарҙар менән йыш осрашабыҙ. Өфөнән ҡырҙа йәшәүселәр шулай уҡ урындарҙа эшләп килгән беҙҙең йәмәғәт ярҙамсыларыбыҙға ла үҙенең мәсьәләләре менән мөрәжәғәт итә ала. Бөтә хеҙмәттәребеҙ ҙә эшҡыуарҙар өсөн бушлай.

Былтыр беҙгә рәсми рәүештә мендән ашыу эшҡыуар мөрәжәғәт итте, тағы ла урындарҙа һәм телефон аша бихисап һорауҙар ҡабул ителде. Шулай уҡ коронавирусҡа бәйле хәлдәр ҡырҡыулашыу сәбәпле булдырылған оператив штаб бик әүҙем эшләп, ике мендән ашыу эшҡыуар үҙен борсоған һорауҙарға яуап алды.

**Йыш ҡына "үҙенә эшләүсе"ләр тураһында ишетергә тура килә. Кем был категорияға инә һәм ул нимә менән отошло?**

- Үҙенә эшләүсе - ташламалы махсус һалым системаһына күсеп эшләүсе физик йәки юридик шәхес. Уның өҫтөнлөктәре бихисап. Мәҫәлән, был категория эшҡыуарҙары һалым декларацияһы тултырмай, сөнки килем махсус мобиль ҡушымтала автоматик һанап барыла. Тағы ла контроль-иҫәпләү техникаһын һатып алырға кәрәкмәй, ә чек талап ителгән осраҡта шул уҡ мобиль ҡушымта аша сығарып биреү мөмкинлеге бар. Шулай уҡ, "ғәҙәти" эшҡыуар һымаҡ, пенсия фондына айырым игәнә күсереү ҙә кәрәкмәй. Был категориялағы эшҡыуарҙар рәсми теркәлеү үтмәйенсә лә эшләй ала.

"Үҙенә эшләүсе" категорияһындағы эшҡыуар дәүләт ярҙамына ла дәғүә итә ала. Йәғни уның төрлө субсидия, бюджет инвестицияларын юлларға хоҡуғы, шулай уҡ төрлө программаларға ярашлы ер биләмәһе, техника, инструмент һәм башҡа әйберҙәргә үҙенә ҡуртымға йәки үҙмилкенә түләп һәм түләмәй алыу мөмкинлеге бар. Түләп алған осраҡта иһә ташламаға дәғүә итә ала.

**Әйҙәгеҙ, аныҡлап үтәйек. Мәҫәлән, мин өйҙә торт бешереп һатһам, "үҙемә эшләүсе" булараҡ теркәлергә һәм һалым түләргә тейеш буламмы?**

- Эйе, тап шулай, сөнки һеҙ килем алаһығыҙ. Ә килемдән һалым түләргә кәрәк. Әгәр ҙә быны эшләмәһәгеҙ, законды боҙаһығыҙ, тип һанала. Ә "самозанятой" булараҡ теркәлеп, килемегеҙҙән ташламалы хаҡ менән һалым түләһәгеҙ, штрафҡа юлығыуҙан ҡурҡмайынса эшләргә була. Шул уҡ репетиторлыҡ менән шөғөлләнеүсе уҡытыусыны ла, төп эшенән тыш шәхси дәрестәр биргән музыкант һәм рәссамдарҙы ла ошо миҫал күҙлегенән сығып ҡарарға була.

Ошо урында, аш-һыуға ҡағылышлы тағы ла бер үҙенсәлек тураһында иҫкәрткем килә. Бешерелгән урын мотлаҡ СанПиН талаптарына тура килергә тейеш. Әгәр ҙә йортоғоҙҙа ошо талаптар үтәлмәһә, тимәк, торт йәки башҡа әйбер бешереп һатырға ярамай.

**Бөтә эшҡыуарҙар ҙа ошо система буйынса эшләй алмаймы ни? Ни тиһәң дә, ташламалы һалым түләү күпкә отошлораҡ.**

- Бөтә төр эшҡыуарлыҡ та был системала эшләүгә тура килмәй. Мәҫәлән, акциз йәки мотлаҡ маркировка талап итеүсе тауарҙар менән һатыу итеүсе, файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу өлкәһендә эшләүсе һәм йыллыҡ килеме 2,4 миллиондан артҡан эшҡыуар был категорияға инмәй. Шулай уҡ эшселәре булған эшҡыуар ҙа "үҙенә эшләүсе" булараҡ теркәлә алмай, сөнки ул хеҙмәткәрҙәре өсөн төрлө социаль страховка иғәнәләре түләргә бурыслы.

**Ә урамда тороп, үҙе етештергән еләк-емеш йәки һөт аҙыҡтары һатыусылар тураһында нимә әйтерһегеҙ? Улар ҙа законһыҙ эшҡыуарлыҡ алып бара, тип һаналамы?**

- Законға ярашлы, шәхси хужалыҡта етештерелгән һәм эшкәртелгән ауыл хужалығы тауары эшҡыуарлыҡҡа инмәй. Ләкин был ҡайҙа теләйһең, шунда тороп һатырға була, тигәнде аңлатмай. Бөтә сауҙа махсус билдәләнгән урындарҙа ғына алып барылырға тейеш.

Һатыуға сыҡҡанда ҡулығыҙҙа шәхси хужалыҡ тураһында мәғлүмәт күрһәтелгән белешмә булырға тейеш. Ундай белешмә "хужалыҡ тураһындағы китап"ҡа таянып яҙыла (похозяйственная книга). Ошо белешмә нигеҙендә баҙар хакимиәтенән һатыуға рөхсәт ҡағыҙы алына. Әлеге шарттар теүәл үтәлгән осраҡта үҙ тауарығыҙҙы бер кемдән дә ҡурҡмайынса һата алаһығыҙ.

**Үҙен "банкрот" тип иғлан итеүсе физик шәхестәр күп. Ә фирма йәки фермер хужалығы етәксеһе ошо процедураны үтә аламы?**

- Эшҡыуарҙың кредиттар буйынса банк һәм башҡа кредиторҙар алдындағы, шулай уҡ һалымдар буйынса бурысы субсидар яуаплылыҡ, тип атала. Финанс көрсөккә килеп терәлгәндә, субсидар яуаплылыҡҡа тарымаҫ өсөн юридик шәхес үҙен "банкрот" итеп таныуҙы күҙаллаған процедураны башлай ала. Бының өсөн бер нисә талаптың үтәлеүе мөһим. Беренсенән, эшҡыуарҙың түләүҙәр буйынса башҡарыу ҡағыҙҙары, һалым органдарының дәғүәһе һәм талаптары күп булыуы, икенсенән, 3 ай дауамында эшселәренә тулыһынса эш хаҡы түләй алмаһа, һалым документтарында күрһәтелгән тауар запасы булмаһа, фирманы "банкрот" итеп таныу тураһында ғариза яҙырға мөмкин.

**Башҡортостан балы менән дан тотҡан төбәк. Ләкин умартасыларҙы борсоған мәсьәләләр күп. Шуларҙың береһе - баҫыуҙарҙы эшкәртеү өсөн ҡулланылған пестицидтарҙан күргән зыян. Умартасыларҙы ошо йәһәттән нисектер яҡлау закон нигеҙендә ныҡытылғанмы?**

- Бал ҡорттарының химик матдәләр һәм пестицидтар менән ағыуланыуына юл ҡуймау өсөн ауыл хужалығы һәм шәхси фермерҙар бер нисә шартты үтәргә бурыслы. Мәҫәлән, агрохимикат ҡулланылырға тейешле баҫыуҙан 7 саҡрымдан яҡын урынлашҡан ауыл халҡы баҫыуҙа башҡарыласаҡ эштәр тураһында өс көн алдан иҫкәртелергә тейеш. Бының өсөн гәзит, радио, социаль селтәрҙәр һәм башҡа матбуғат саралары ҡулланыла. Игланда эшкәртеләсәк ер биләмәләренең сиге күрһәтелергә, эш ваҡыты һәм ниндәй ысул менән эшкәртеләсәге тураһында белешмә булырға тейеш. Шулай уҡ ҡулланыласаҡ агрохимикаттарҙың һәм пестицидтарҙың исемдәре хаҡында ла мәғлүмәттең булыуы шарт.

Химик матдәләрҙе бөтөнләй ҡулланмайынса булмай, сөнки баҫыуҙар эшкәртелмәгән осраҡта ауыл хужалығына зыян килеүе бар. Бал ҡорттарының баҫыуҙарҙа үҫкән үҫемлектәрҙән дә бал йыйыуын иҫәпкә алғанда, ике яҡҡа ла бер-береһенә зыян килтермәҫлек итеп эш итергә өйрәнергә кәрәк. Шулай уҡ бал ҡорттарын һаҡлау өсөн ҡулланылған тағы бер үҙенсәлек - ауырыған ҡорттарҙы дауалау өсөн Рәсәй законына ярашлы рәсми теркәү үтмәгән дарыуҙарҙы ҡулланыу тыйыла.

**Буласаҡ тикшереүҙәр хаҡында эшҡыуарҙы алдан иҫкәртергә тейештәрме? Тикшереүҙең һөҙөмтәләре менән риза булмаған саҡта ул ҡайҙа мөрәжәғәт итә ала?**

- Бизнесҡа йөкләмә кәмейәсәк, сөнки ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан бәләкәй эшҡыуарлыҡты тикшереү буйынса эштәр туҡтатылып торҙо. Ләкин прокурор менән раҫланған һәм мораторийға эләкмәгән урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты тикшереүҙәр тураһында оноторға ярамай.

Ағымдағы йылдың 1 июленән дәүләт һәм муниципаль контроле тураһындағы Федераль закон үҙ көсөнә инәсәк. Уға ярашлы, документаль һәм сығып тикшереү ваҡыты 10 эш көнөнән артмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ быйыл шәхси эшҡыуарҙарҙы һәм юридик шәхестәрҙе аудио һәм видеобәйләнеш аша ла тикшереүҙәре мөмкин.

31 июлдән һуң планға ярашлы тикшереүҙәрҙе контроль орган инспекция визиты менән алыштырыуҙары ла бар. Был хаҡта тикшереләсәк эшҡыуар йәки ойошма 10 көн алдан иҫкәртелергә тейеш. Әйтеп үтергә кәрәк, яңы алым бөтә төр тикшереүҙәргә лә ҡағылмай. Тикшереү һөҙөмтәләре менән килешмәгән осраҡта, эшҡыуар актты ҡулына алғандан һуң 15 көн эсендә ҡаршылығын белдереп, яҙма рәүештә тикшереүсе ойошмаға мөрәжәғәт итергә мөмкин.

**Республикала бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам бар, тип әйтә алабыҙмы?**

- Һис шикһеҙ, республика Хөкүмәте тарафынан төбәктә эшләүсе эшҡыуарҙарға ярҙам күрһәтелә. Төбәк етәкселеге эшҡыуарҙарға ҡарата һәр ваҡыт асыҡ йөҙ күрһәтә, яңы төр яҡлау саралары булдыра, бизнесты үҫтереүгә этәргес көс биреүсе өҫтәмә эштәр атҡара.

Шулай уҡ республикаға ситтән инвестициялар йәлеп итеү, эшҡыуарлыҡҡа уңайлы шарттар булдырыу ҙа әүҙем эшләй. Тағы ла Башҡортостанда эшҡыуарҙар һанын арттырыуҙы һәм уларҙың төбәк иҡтисадында үҙ урынын табыуын күҙаллаған программалар яҡшы эшләй.

Ләкин шул уҡ ваҡытта хәл ителәһе мәсьәләләр ҙә бар. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ алып барыусыларҙы бигерәк тә һалымдарҙың юғары булыуы, тикшереүҙәрҙең йыш атҡарылыуы, кредит алыуҙағы ҡыйынлыҡтар борсоуы тураһында әйтеп үтергә кәрәк.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Эшҡыуар булыуы еңел түгел, ти Флүр Минзаһит улы. Ләкин күңелендә ошо осҡондо йөрөтөүсе, йүнсел һәм әүҙем кешенең юлындағы бөтә ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығып, уңышҡа өлгәшәсәгенә шиге юҡ икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды әңгәмәсем. Шулай уҡ киләсәккә һәр саҡ ышаныс һәм өмөт менән ҡарарға кәрәк, тип өҫтәне. Был һүҙҙәр үҙен эшҡыуарлыҡта һынап ҡарарға теләгән һәр кемдең ҡолағына салыныр һәм үҙ эшен асыуға этәргес көс булыр, тигән ышаныстабыҙ.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ "Исторический Башкортостан", "Башкирия" башҡортса нисек була? Тәржемәселәр барыһын да Башҡортостан тип ала ла ҡуя. Ә Башкирия - ул киңерәк мәғәнәлә ҡулланыла, ул Тарихи Башҡортостан.



ҒАЛИМ ҺҮҘЕ

**Мәғлүм булыуынса, былтыр 25 декабрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын ҡабул итеүе тураһында белдерҙе. Әммә ул шунда уҡ халыҡҡа сығарылмағанлыҡтан, йәмғиәттә, ғәҙәттәгесә, бер аҙ шау-шыу ҙа булып алды: Стратегия ҡабул ителә, әммә ни өсөн был хаҡта халыҡ белмәй ҙә ҡалды; унда халыҡ фекере иҫәпкә алынғанмы һәм башҡалар. Ошо көндәрҙә Стратегия Ҡоролтай сайтына урынлаштырылды һәм уның төп йүнәлештәре менән таныштырып китеүен һорап, документты эшләүҙә туранан-тура ҡатнашҡан, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының социамәҙәни анализ үҙәге етәксеһе Юлдаш ЙОСОПОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫН ҮҪТЕРЕҮ...

## ошо документтың нигеҙенә һалынған

- Стратегия 2019 йылда, Ҡоролтайҙың ул ваҡыттағы етәксеһе Данир Ғәйнуллин эшләгән ваҡыттағы состав, аныҡлап әйткәндә, Илдар Киньәбулатов командаһы тарафынан яҙыла башланы һәм тупланған документтар, фекерҙәр һәм тәҡдимдәр 5-се ҡоролтайҙан һуң Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһына тапшырылды. Яңы эш төркөмөнә мин дә индем.

Стратегия ике өлөштән тора: тәүгеһе - теоретик өлөш, икенсеһе төп эштәргә йүнәлтелгән ҡушымта. Методологияла когорта ысулы ҡулланылды. Теоретик яҡтан ҡарағанда, беҙ халыҡтың кем икәнен беләбеҙ, халыҡ - ул синхрон һәм диахрон бәйләнеш системаһы. Был осраҡта нигеҙ итеп тап шундай ҡараш адыңды ла инде, йәғни беҙ ошо мәғлүмәт бәйләнештәрен формалаштырыу һәм оптималләштереү буйынса эшләргә, һәр быуын буйынса айырым эш алып барырға тейешбеҙ. Мәҫәлән, беҙ балалар, үҫмерҙәр, студент йәштәр, төрлө берләшмәләрҙә когортаға бүләбеҙ һәм ошо йәмғиәттәр араһында яҡшы, ышанысты бәйләнештәр булдырыуҙы күҙаллайбыҙ. Шул күҙлектән 10 төп стратегик йүнәлешә билдәләнек.

**Беренсеһе -** Башҡорттарҙың демографик үҫешенә булышлыҡ итеү. Бында күп балалы башҡорт ғаиләһенә, ғаилә культын үҫтереүгә ярҙам итеү ҡарала. Төрлө учреждениелар (БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау, БР Мәҙәниәт һ.б. министрлыҡтар, БДБҠ, бик күп ойошмалар) саралар үткәрә, әммә был осраҡта беҙҙең алда ошо эшмәкәрлекте системаға һалыу һәм уны модерациялау тора.

**Икенсеһе -** балалар өсөн башҡорт мәҙәни һәм зауыҡ мөхитен булдырыу. Был осраҡта һүҙ яңы тыуған сабыйҙарҙан алып 6-7 йәшлек балалар тураһында бара. Йәғни улар балалар баҡсаларына йөрөүсе сабыйҙарыбыҙ. Бында беҙ уларға үҙ-ара аралашыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәр тыуҙырырға тейешбеҙ. Ул кинестетик яҡшы уйынсыҡтар эшләү, онлайн уйындар, видеоконтенттар булдырыу, шулай уҡ стримдарын балалар ҡараған видеоблогерҙарҙы үҫтерергә лә кәрәк. Шул иҫәптән балалар араһында стримерҙар һәм блогерҙар араһында конкурстар үткәреү.

**Өсөнсөһө -** балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр өсөн башҡорт мөхитен булдырыу. Бында саралары балаларға үҙ-ара аралашырға ярҙам иткән институттар булдырыу тураһында һүҙ бара. Иң мөһим стратегик инициатива тип мин йәйге лагерҙарҙы ойоштороуҙы билдәләр инем. Барыбыҙ ҙа йыл һайын уҙғарылған лингвистик лагерҙар булыуын беләбеҙ. Улар, ысынлап та, уңышлы һәм һөҙөмтәле. Ошо йүнәлеште үҫтереп, лингвистик лагерҙар ғына түгел, ә предметтар буйынса БДИ-ға маҡсатлы әҙерләү буйынса лагерҙар ойоштороуҙы, уға республиканың һәм Рәсәйҙең алдынғы эксперттарын, педагогтарын саҡырыуҙы күҙаллайбыҙ. Үҫмерҙәр был лагерға эләгеп, беренсенән, башҡорт мөхитендә үҙ-ара аралашырға өйрәнә, шул уҡ ваҡытта мөһим предметтар буйынса БДИ-ға әҙерләнә, йәштәрҙең үҙ мөхитендә этно-милли дискурс барлыҡҡа килә. Бында мин ижадты, шул иҫәптән формаль булмаған ижадты (рэп, дискотекалар һ.б.) үҫтереүҙе лә күҙ уңында тотам, сөнки был йүнәлештәргә лә тейешле иғтибар бүлеү мөһим. Шулай уҡ спортты үҫтереү, йәғни ылаҡ уйыны, уҡ атыу кеүек традицион спорт төрҙәре буйынса һәм башҡа айырым чемпионаттар ойоштороу ҙа системаға һалынырға һәм мәктәп йәшендәге үҫмерҙәргә йүнәлтелергә тейеш.

**Дүртенсе йүнәлеш -** башҡорт студент йәштәре берләшмәләрен булдырыу. Бында әлеге көндә уңышлы эшләп килгән студент йәштәр ассоциацияһын үҫтереү планлаштырыла. Был осраҡта башҡорт студенты ниндәй мөмкинлектәргә эйә булырға тейеш: ул, мәҫәлән, Башҡортостандан ситтә уҡырға инә һәм ошо ерҙә ойошторолған башҡорт студент берләшмәһе менән генә түгел, ә Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә белем алған студенттар менән аралашыу мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. Бының өсөн шарттар булдырыу, студенттарҙы берләштереүсе саралар ойоштороу мөһим. Мәҫәлән, Студенттар һабантуйы, Ауылиадалар, йәғни уларҙың ҡайҙалыр сығыу, делегациялар ҡабул итеү, башҡорт студенттарының үҙ тормошо менән йәшәү мөмкинлеген булдырыу. Күҙ алдына килтерегеҙ: мәктәп йылдарында үҫмер БДИ-ға әҙерләнеү буйынса йәйге лагерҙарҙа була, артабан юғары уҡыу йортона уҡырға инә һәм йылына бер тапҡыр йәки ике йылға бер тапҡыр Силәбе өлкәһендәге башҡорт студенттарына барып, берлектә ниндәйҙер сара үткәреү мөмкинлегенә эйә була.



**Бишенсе -** башҡорт эшҡыуарҙары берләшмәһен булдырыу. Балалар баҡсаһынан башлап мәктәп йәшендә, студент осоронда башҡорт мөхитендә йәшәгән кеше оло тормошҡа аяҡ баҫып, эшҡыуарлыҡ, бизнес юлын һайлай икән, шулай уҡ ул яңғыҙы булмаясаҡ. Бында мин питчинг формаһын күҙ алдына килтерәм, йәғни йәш эшҡыуар үҙенең эшен күрһәтергә, уны нигеҙле яҡларға һәм һуңынан кәрәкле ресурстар алырға, быныӊ өсөн башҡорт эшҡыуарҙары йәмғиәте барлыҡҡа килергә, берләшергә, үҙ-ара аралашырға, йылына бер тапҡыр булһа ла йыйылып, шундай саралар үткәрергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта улар башҡорт гуманитар мәҙәни өлкәһенә үҙ өлөшөн индерергә лә өйрәнәсәк.

**Алтынсы -** йәмғиәтебеҙҙең ҙур өлөшөн алып торған башҡорт уҡытыусылары һәм педагогтары берләшмәһен булдырыу. Был пунктҡа бик күп эштәр һәм бурыстар билдәләнгән, әммә мин береһенә генә туҡталып китер инем: ул башҡорт гимназиялары консорциумын булдырыу. Йәғни, башҡорт гимназияларының үҙ консорциумы, уларҙа уҡытыусыларҙың ғына түгел, уҡыусылар араһында ла үҙҙәренең аралашыу мөхите булырға, мәҫәлән, үҙ-ара эске чемпионаттар, олимпиадалар үткәргә, райондарҙағы һәм ҡалаларҙағы гимназистар бер-береһе менән аралашырға, бер-береһен күрергә, танып торорға тейеш.

**Етенсе -** "Айыҡ ауыл", Башҡорт ырыуҙары хәрәкәте, урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы, юл буйы сервисын үҫтереү кеүек өҫтөнлөклө проекттар сиктәрендә урындағы йәмәғәт ойошмаларын һәм зыялыларҙы берләштереү. Бында йәмәғәт ойошмалары, йәмәғәт активының муниципаль кимәлдә үҙ-ара бәйләнеше күҙаллана.

**Һигеҙенсе -** мәҙәниәт-ара аралашыу һәм башҡорт милли мәҙәниәте тураһында ҡараштар формалаштырыуҙа башҡорт интеллектуаль элитаһын берләштереү. Бында һүҙ Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәл тураһында бара һәм айырым бурыстар билдәләнгән, айырым йүнәлештәр буйынса эшләгән интеллигенция вәкилдәре (ижади интеллигенция, фәнни интеллигенция, ижади союздар һ.б.) бер-береһе менән хеҙмәттәшлектә эш итергә тейеш.

**Туғыҙынсы -** төбәк-ара һәм халыҡ-ара кимәлдәрҙә башҡорт берләшмәләрен үҫтереү. Һүҙ башҡорттар аҫаба халыҡ булған һәм диаспора булып йәшәгән төбәктәрҙәге йәмәғәт ойошмалары тураһында бара. Улар менән эш алып барғанда беҙ быны аныҡ билдәләргә тейешбеҙ, мәҫәлән, аҫаба халыҡ булған Пермь крайы башҡорттары һәм Владимир өлкәһе башҡорттары менән эшләгәндә төрлө ҡараш, төрлө алымдар ҡулланырға кәрәк, тәьминат тә төрлөсә.

**Унынсы -** башҡорт халҡына хоҡуҡи йәһәттән ярҙам күрһәтеү. Бында өс мөһим йүнәлеш билдәләнә: граждан хоҡуҡтарын яҡлау, ул башҡорт халҡының экологик, башҡорт телен уҡыу һәм башҡорт телендә белем алыу, хеҙмәт мигранттары хоҡуҡтарын яҡлау менән билдәләнә. Башҡорт халҡының рухи мирасын һаҡлау - ул территориаль брендтарҙы теркәү, башҡорт ырыуҙарының гербын, геральдикаһын ҡабул итеү, тәбиғи һәм мәҙәни мираҫыбыҙҙы ЮНЕСКО-ның исемлегенә индереү, тарихты боҙоп күрһәтергә тырышыуҙарға юл ҡуймау, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ тормошҡа ашырыу. Был осраҡта һүҙ Терминология комиссияларының системалы эшләүе, шулай уҡ неологизмдар буйынса комиссия ойоштороу зарурлығы тураһында бара. Шулай уҡ муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре өсөн башҡорт телен минималь кимәлдә белеү талаптарын эшләү зарурлығын да аңлата. Быныӊ өсөн шарттар, аттестация талаптары булырға, йәғни муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре башҡорт телен белеүгә даими рәүештә аттестация үтергә тейеш. Был талап минималь булһын, иң мөһиме - муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәрендә башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килһен.

Ҡыҫҡаса, Башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһы шундай пункттарҙан тора һәм уны нисек ғәмәлгә ашырыу механизмдары ла ентекле яҙылған һәм беҙ Стратегияны тормошҡа ашырыу өсөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән дәүләт структуралары араһында килешеү төҙөләр тип күҙаллайбыҙ. Стратегия ҡабул ителде лә, ул шул килеш тормошҡа ашырылырға, йәғни ҡатып ҡалған документ, тип күҙ алдына килтереү дөрөҫ түгел. Ул заман талаптарынан сығып, даими рәүештә камиллаштырылырға, яңыртылырға тейеш.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Ни өсөн документ раҫланғандан һуң шунда уҡ халыҡҡа сығарылмай торҙо, сөнки ул русса эшләнде һәм уны тәржемә итергә, ҡайһы бер терминдарҙы мәғәнәһе буйынса яраҡлаштырырға тура килде. Мәҫәлән, "Исторический Башкортостан", "Башкирия" башҡортса нисек була? Тәржемәселәр барыһын да Башҡортостан тип ала ла ҡуя. Башҡортостан - ул Башҡортостан Республикаһы. Ә Башкирия - ул киңерәк мәғәнәлә ҡулланыла, ул Тарихи Башҡортостан. Шуға күрә, оҙаҡ фекер алышҡандан һуң Башҡорт иле тигән һүҙбәйләнеш индерҙек. Бындай мәлдәр бик күп, сөнки әлегә тиклем бер генә халыҡта ла нормаль стратегия булмаһа ла һәм уның аналогтары ла юҡ. Әлеге ваҡытта Башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһы ғәмәлдә ҡулланыуға яраҡлы етди документ булып тора һәм ундағы пункттар буйынса эшләргә кәрәк", - ти Юлдаш Мөхәммәт улы. Әлбиттә, абсолют камиллыҡ бары тик тәбиғәттә генә булыуы мөмкиндер, моғайын, ә ҡалғаны - барыһы ла даими камиллаштырыуға, яңыртыуға, төҙәтеүгә мохтаж. Һәр халдә, Стратегияның да өҫтөнлөктәре һәм етешһеҙлектәре бары тик уны ғәмәлдә ҡулланыу барышында ғына асыҡланасаҡ. Башҡорт халҡын үҫтереү программаһын ни тиклем тиҙерәк ҡуллана башлайбыҙ, хаталарҙы, етешһеҙлектәрҙе шул тиклем иртәрәк күрәсәкбеҙ һәм шул тиклем тиҙерәк төҙәтеү мөмкинлегенә эйә буласаҡбыҙ. Ә быныӊ өсөн эшләргә кәрәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

***✓ Кеҫәһенә ҡулын тығып уйға ҡалды. Бармаҡтары кеҫә төбөнән кисәге ҡаҙаҡты эҙләп тапты. Шуның менән ер стенаны тырнарға тотондо. Асығыуы, һыуһауы үҙәгенә үтте . Селәү ҙә юҡ, исмаһам. Ҡабыр ҙа йотор ине.***






## Икенсе көн

Өшәнеп уянды. Яҡтыртҡайны. Сағыу нурҙары соҡорға төшөп етмәһә лә, ер өҫтөндә ҡояштың донъяны иренмәй, бар күңелен биреп наҙлауы, йылытыуы аңлашыла ине. Ир кирелеп, бер кинәнес менән өҫкә ҡарап торҙо.

- Хәйерле иртә, ер өҫтө! Доброе утро, страна! Был ер шарында берәйһе бармы, эһе-һей? Нишләп бер кем эҙләмәй һуң ул? Эһе-һей, теш йыуырға ине, бит-ҡул сайҡарға ине, килтерегеҙ берәй сүмес һыу, - ирендәре кипкәнен тойҙо. - Һыу, һы-ыу, эсергә ине туйғансы.

Эйелеп биштәрен тотҡоланы, унда бер ни юҡлығын белһә лә, түңкәреп ҡараны. Кисәге буш шешәне иренenә терәп, өҫкә ҡалҡытты. Теле менән шешә башын яланы.

- Һе, бер тамсы ҡалған булған, ҡалай тәмле. Ныҡ тәмле.

Ватылып китмәһен тип, һаҡ ҡына түш кеҫәһенән телефонын килтереп сығарҙы. Тейешле нөктәһенә баҫып тоҡандырып ҡараны. Уныһы көсәнеп маташты шулай ҙа, "пип-пип" тине лә һүнде. Өҫкә күтәреп бәрергә уйланы ла кире кеҫәһенә һалды.

- Үлде-е. Беренсе булып телефон үлде, тип теркәйек. Сиратта кем? - яңынан телефонын усына алды. - Үҙе ниндәй затлы! Айфо-он, имеш. Шуны көсләп бисә кредитҡа алдырған булды. Ҡырҡ бер мең һумға. Ай ярымлыҡ эш хаҡы.

Бисәһе булып ҡыланырға тотондо. Штормовка итәген башына ҡаплап, йәғни "яулыҡ ябынып", артын уйнатҡыланы.

- Кеше араһында кәм-хур булып йәшәмәйек, интернеты ла, камераһы ла, ватсабы ла, инстаграмы ла бар. Хеҙмәттәштәрең күрһә, һоҡланасаҡ ҡына. "Заман кешеһе" тип әйтәсәк... - Нәҙек тауыш менән бисәһе булып һөйләнде. - Әйткәндер. Һоҡланғыс әйбер. Ә бөгөн ул... буш шырпы ҡабы.

Оҙаҡ ҡарап торҙо аппаратына. "Стив Джобстың, юҡ, хатта бер малай-шалайҙың да умырып тешләп ырғытҡан алмаһы был айфондан ун тапҡырға ҡәҙерлерәк әле миңә. Ҡыйбатыраҡ та. Ырғытылған алманың икенсе яғынан бер умырып ҡына ҡапҡанда, ҡалай һыуһын ҡаныр ине".

- Үлде айфон, ә мин тере. Әле, әлегә. Был күк аҫтында бер нимә лә мәңгелек түгел. Бер нимә лә! Көс бөтһә, мин дә - "пип-пип", һүнермен.

Кеҫәһенә ҡулын тығып уйға ҡалды. Бармаҡтары кеҫә төбөнән кисәге ҡаҙаҡты эҙләп тапты. Шуның менән ер стенаны тырнарға тотондо. Асығыуы, һыуһауы үҙәгенә үтте . Селәү ҙә юҡ, исмаһам. Ҡабыр ҙа йотор ине.

Стенаны оҙаҡ тырнаны. Уйлаһаң, башҡа шөғөл дә юҡ инде. Шулай тырнап, бәлки, баҫҡыс эшләп булыр. Ләкин эш ырамлы барманы - ер ҡаты, ҡаҙаҡ ҡыҫҡа ине. Оһо, әллә ерҙә дым бар инде? Усына семтем генә ер һалып ҡабып ҡараны ла... төкөрөп ебәрҙе.

- Фу, ҡалай тәмһеҙ, эт буғы тәме сыға, - оҙаҡ төкөрөндө.

"Робинзон Крузо кеүек көндәрҙе билдәләп барырға кәрәк. Ваҡыт менән дуҫ булһаң, ер шары менән бергә әйләнәһең, тигән һүҙ, - тип уйланы. Ултырған килеш кенә оҙон таяҡ һыҙып ҡуйҙы. - Тә-әк, бында мин икенсе көн, кисә нисәһе ине әле? Шәмбе ине, ун дүрте, тимәк, бөгөн - ун бише. Бер һыҙыҡ, ике һыҙыҡ", - тағы берҙе һыҙҙы.

- Ҡалай онота яҙғанмын даһа, - тип тағы аяғына баҫты. Ҡулын кеҫәһенә тығып, уйға ҡалды. Ике көндән ҡыҙының тыуған көнө. Ун бер йыл элек унан да бәхетле кеше юҡ ине. Балалар табыу йорто алдында, дөрөҫөрәге, ҡатыны ятҡан палата тәҙрәһе янында ярты көн буйы ҡулына сәскә тотоп балҡып, ҡатып торғайны. Нисектер шулай киткеһе килмәне. Ул китһә, Әминәһе, донъяға яңы ауаз һалған Сәриәһе, исемде алдан уҡ уйлап ҡуйғайнылар, менән бер ни булыр кеүек ине. Ҡатыны, бар ҡайт, әтеү мин илайым, тиһә лә, шулай уларҙың именлеген һаҡлап йылмайып, һөйөнөп тора бирҙе. Үҙһүҙле булған, ҡәһәрең. Ямғырлы көн ине. Лысма һыу булды. Эңер төшкәс кенә ҡуҙғалды. Бәхетле ине ул. Ә бөгөн? Нисек тә сығырға кәрәк бынан. Тағы һикереп ҡараны. Был юлы ҡысҡырманы, тыныс ҡына нимәгәлер тотоноп үрмәләргә тырышты. Тик тотонор ек тә, еп тә, үрмәләр көс тә, форсат та юҡ ине. Өмөтләнеп өҫкә ҡарап ҡатыуҙан башҡа сара ҡалманы.

"Их, Сәриәм, алтыным, ҡояшым минең. Өйҙә мине яратҡан берҙән-бер зат. Үлеп китһәм, һағыныр инде балам. Бер үҙе илап торор инде ҡәберем ситендә. Һәм әсәмдең күҙ йәштәре түгелер. Ул, бахырҡай, ҡайғыға түҙмәҫ, күбәләктәй генә йәне минең арттан эйәрер инде. Юлға сыҡмай тор әле, балам, тип бойоҡ ҡына күҙҙәре менән бағып ҡалғайны ла, их... Юлда ла, тормошта ла әсәйҙәр фатихаһы кәрәк шул..." - Ике күҙенән дә буй-буй булып йәштәре ағып китте. Үҙе һиҙмәнеме, әллә һиҙһә лә иғтибар биреүҙең әһәмиәте юҡ, тинеме, һөртмәне лә, йәше тын ғына аҡты ла аҡты.

- Йүгереп кенә ҡайтып кил ине, йылы ғына ҡосағыма алып ҡыҙымды һөй ине, - тине, тамағындағы төйөрҙө йотоп, аяныс тауыш менән.

"Нимә тип сығып киттем мин был юлға? Ер кәрәк берәүгә. Ниндәй етмәҫ байлыҡтыр. Фатир бар, өс бүлмәле, нимә етмәй безгә? Йыл да Төркиәгә барабыҙ..."

Бисәһен күҙ алдына баҫтырҙы. Уның иркәләп, уға ярарға тырышып һөйләгән хәбәрен ишеткәндәй булып, тирә-яғына ҡаранып алды. "Юҡ, безгә яҡын-тирәлә ер кәрәк, хәҙер ҡала ситендә йәшәү модно. Ҡала саңын еҫкәп, химия ашап ятҡансы. Үҙебеҙ үҫтерәбеҙ картуф, үҙебеҙҙең кишерҙе ашайбыҙ".

- Ашаның, ашамай ни! - Ур тансы бармағын өҫкә күтәрҙе, әсе итеп һүгенеп ебәрҙе. - Бына һиңә кишер!

"Байлыҡ, байлыҡ, аҡса, аҡса!.. Ул бисәнең һаман байлыҡ тип яныуы. Уф! Йыйған аҡсаһы юҡ, бөтәһе лә кредитҡа. Иртәле-кисле бил бөгәһең, ике эштә эшләп. Ни хәжәтемә был баҡса? Ер кәрәк берәүгә. Бына бер аршин ер етә. Нишләп кеше түбән төшһә генә күкте күрә башлай икән?"

Ярай, ҡояш йылы. Әбейҙәр сыуағы. Ҡояш нурҙары соҡорҙоң өҫкө өлөшөнән аҫҡараҡ та төшә бирҙе. Ир ҡулын уға табан һуҙҙы, тик "ҡояш"ҡа буйы етмәне.

Тағы эсендә бүреләр олоуы уйланырға ҡамасаулай башланы. Тәғәм ризыҡ ҡапмағанына тәүлектән ашты. Һыу эсмәгәненә лә шулай.

Кеше ашамай айҙар буйы йәшәй ала, шикелле, ә бына һыуһыҙ оҙаҡҡа бармай, тиҙәр. Тапмаһалар, ошонда кибә икән. Уф, асыҡтырҙы.

- Э-э-һей! Ишетәһегеҙме, мин асыҡты-ым!

Штормовка кеҫәһенән аҡса янсығын килтереп сығарҙы ла унан меңлек тартып алды. Ҡулы менән өҫкә һуҙҙы.

- Бына, бына аҡ-са! Мә, кемгә кәрәк, мә. Тик мине бынан сығарығыҙ ғына, бар мөлкәтемде бирергә ризамын, - тип мығырҙаны. Үҙе уйында һаман һөйләшеүендә булды. - Был соҡорҙа, ошо тотҡонлоҡта был аҡсаның бер тинлек ҡәҙере лә, кәрәге лә юҡ. Теге донъяға киткәндә һиңә байлыҡ кәрәкмәй, тигәндәрен ишеткәнем бар ине, бына ул. Иҫ киткес бай булған, ярты донъяны ҡулында тотҡан Сөләймән хаким, үҙе үлгәс, табут өҫтөндә уның буш ҡулдарын күрһәтеп ятҡырыуҙарын һораған. Йәнәһе лә, фанилыҡта күпме байлыҡ йыйһаң да, теге ысын донъяла уның һис тә кәрәге юҡ икәнен шулай аңлатҡан. Унда алып барып та булмай, барыһы ла фанилыҡта ҡала. Аңлайым мин һине хәҙер, Сөләймән хаким, бик һәйбәт аңлайым...

- Сөләймән хаким, мин һине аңлайым! - тип ҡысҡырҙы. Тик өнө үҙенән бик йыраҡ китмәгәнен аңларға теләмәне.

"Машина - кредитҡа. Телефон - кредитҡа. Бисәһенә тун менән ҡыҙына алған затлы ноутбук - кредитҡа. Кредит, кредит. Бына нимә ул кредит? Ҡулдарында быҒау ҙа юҡ, аяҡтарына тышау ҙа һалмағандар, - ҡулдарын алға һуҙҙы, һыҙлаған аяғын һелкеткеләп алды, - тик һин бер ҡайҙа ла китә алмайһың, ҡаса алмайһың, оса алмайһың, сөнки һин - әсир, һин - соҡорҙа. Бына минең һымаҡ соҡорҙа. Бына ошо була ул кредит! Бөтә ил кредитта, бөтә ғәм шулай тотҡонда, иплəп кенә күҙҙе бәйләйҙәр ҙә һине әсирлеккә алалар. Кредитҡа кермәйек, бурыс алмайыҡ, тип ул бисәгә күпме тылҡыйым, юҡ. - Тағы бисәһе булып ҡыланып дауам итте: - Кешесә йәшәгең килмәйме ни һинең, ә? Бар донъя кредитҡа йәшәй, - тип ҡуйҙы.

"Тимәк, бар халыҡ минең һымаҡ соҡорҙа. Тотҡо-онда!"

- Эһе-һей, өҫтәгеләр, ер өҫтөндә йөрөүселәр, улай һөйөнмәй тороғоҙ әле, мин генә соҡорҙа түгел, һеҙ ҙә... Һеҙ ҙә бығаулы, һеҙ ҙә тышаулы, - сыҙырт итеп төкөргән булды. Тик кипкән ирендәр, кипкән тамаҡ "сыртламаны", киреһенсә, ярылып китерҙәй булып һыҙлап-әсетеп китте. Ир нисек тә уйланырға тырышты. Уй ғына уның ҡотолоу сараһы икәнен ул төшөнә ине. Уйһыҙ ҡалһаң, йәшәүең туҡтаясаҡ. Нисек тә бирешмәҫкә кәрәк. Йә берәйһе килеп сығыр, Әминә эҙләргә сыҡҡандыр, моғайын. Бер төн ҡайтманы бит инде. Уның бындай ғәҙәте һис тә булғаны юҡ таһа. Ул бисәһенә тоғро, ваҡытында ҡайта, ҡайта алмаһа, шылтыратып әйтә ине. Өлгөлө ғаилә башлығы икәнен барыһы ла белә инде.

"Урамда һәр икенсе затлы машина кредитҡа алынған. - Нисек тә үҙенең мейеһе-зиһене менән уйнап, үҙен уятырға, асыҡҡанын онотоорға тырышты. - Хөкүмәт кредит бирмәһә, фатир һиңә, мә. Уйлаһаң, шулай шул. Эш хаҡын йыйып ҡына алам тиһәң, пенсия йәшендә, бәлки, фатир ҙа алып булалыр. Кризис булып, аҡсаның ҡиммәте кәмемәһә! Иртәгәһе көнгә ышаныс та юҡ. Ә былай алаһың да ғүмер буйы, эйе, ғүмер буйы ипотека түләйһең. Бына фатир өсөн алған ипотеканы нисә йылдан... - устарын алдына һалып, бармаҡтарын бөкләп эстән иҫәпләп тә алды, - тә-әк, биш, һигеҙ... туғыҙ йыл ҡалды, миңә ул ваҡытта 61 йәш була. Пенсияға йыраҡ икән әле. Хәҙер ер алабыҙ, бер 950 мең һум буласаҡ ул, ете йылға. Тағы йорт, мунса һәм башҡаһын һалыр өсөн кредит алырға тура киләсәк. Инәндең тоҙло сәйе икән... Юҡ, был соҡорҙан сыҡмағаның мең артыҡ. Эй, кешеләр, кәрәкмәй, ҡотҡармағыҙ мине. Борсолмағыҙ ҙа, мин соҡорҙа ғазап та кисермәйем, мин кредитта ғына ултырам, үҙем түләйем. Ғазаптарым булһа, үҙем күтәрермен әле. Үҙем түләйем кредит өсөн дә... гонаһтарым өсөн дә..."

- Соҡорҙан сығармағыҙ ҙа. Сыҡҡы ла килмәй! - тип биштәренә йәйелеп ултырҙы. Сыҡмайынса ла булмай, үлергә лә ярамай. Ул кредитты кем түләй һуң? Шунан фатирҙан бисәмде, әсәмде, ҡыҙымды, түләй алмайһығыҙ, тип ҡыуып сығарһалар? Юҡ, минһеҙ булмай.

- Сыҡмайым. Сыҡҡым килмәй! - тип ҡабатланы.

Шул ваҡыт эт өргән тауыш ишетелгәндәй булды. Ир урынынан һикереп торғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

- Эһе-һей, ҡотҡарығыҙ, мин бында, мин бында. Ҡарабай, Аҡтырнаҡ, Аҡтүш, маһ-маһ! - үҙе ҡысҡырҙы-ҡысҡырҙы ла, ҡолағын өҫкә ҡаратып, тынып-тынып алды. Башҡаса тауыш ишетелмәгәс, өмөтләнеп соҡор ауыҙына мөлдөрәп оҙаҡ ҡарап торҙо ла яңынан шыуып төшөп ултырҙы. - Бәлки, һин Барбосты-ыр...

Бер баҫты, бер ултырҙы ул. Тағы үрелеп һикергеләп тә ҡараны. Баяғы ҡаҙаҡ менән тағы ла стенаны соҡоп ҡулдарын ҡанатып бөттө. Ҡараңғы төшкәнсе, өмөтөн һүндермәйенсә, күҙен өҫтән алманы.

**(Дауамы. Башы 11-се һанда).**

✓ *Дәүләтҡужаны һуғыш яраһы бик ҡаҡшата, күҙендә тороп ҡалған тимер ярсығы һыҙлап ыҙалата, уның бөтә шатлығы улы Салауат менән ҡыҙы Ғәлиә булһа, бөтә ғорурлығы - башҡортлоғо һәм яугир-фронтовик булыуы.*

*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# УРАЛТАУҒА ҠОТ ҠАЙТАРЫР САЛАУАТ!

**"Минең исемем Салауат" тигән документаль фильмдың премьераһы "Родина" кинотеатрының ҙур залында үтте. Оло зал тулы халыҡ тын да алмайынса, шаҡҡатып, экрандағы ғәжәйеп оло яҙмыш һәм ижад балҡышын тамаша ҡылды.**

Күренекле скульптор һәм иҫ киткес һәләтле замандашыбыҙ - Салауат Александрович Щербаков тураһындағы фильм бик ябай һәм тормошсан кадрҙан башлана. Бына фильм авторы Гәүһәр Батталова, билдәле документаль кинотаҫмалар ижад иткән журналист, Мәскәү урамы буйлап атлап бара, береһенән-береһе йөкмәткеле мөһабәт скульптуралар һәм композициялар янынан үтә. Ул да, миллиондарса кешеләр кеүек, ғәжәйеп күркәм һындарға һоҡланып һәм ғәжәпләнеп ҡарай, сөнки уларҙың һәр береһе ниндәйҙер тарих һөйләй, ниҙер көйләй, ниндәйҙер ауаз-оран һала... Баҡһаң, уға ҡаршы атлап килгән мыҡты кәүҙәле ир-егет - ошо матурлыҡ һәм рухи йөкмәтке аша таш урамдарға йәм биреүсе скульптор Салауат Щербаков үҙе икән. Ике замандаш осраша, икеһенең дә уйы бергә тыуған яҡҡа - Башҡортостанға ҡарай уҡтала. Тыуған Уралҡайға һөйөнсөләргә ашыға автор, һуңғы йылдарҙа йөрәге Ҡуштау тетрәнеүҙәрен кисереп, туған теле һәм туған мондары яҙмышы өсөн хәсрәтләнеп аптыранған башҡорт халҡына Салауат исемле улының оло ижады хаҡында бәйән итергә теләй.

Тәндәрҙе сымырҙатып, ябай ғына һүҙҙәр әйтелә: "Минең исемем Салауат!" Башҡорт улдарының затлы исеменән күҙҙәргә мөлдөрәмә йәш тула. Салауат... Һин тап шулай булырға, шулай йәшәргә һәм иленә ҡайтырға тейешһең, башҡорт улы! Ғүмерендә тәүге мәртәбә иле алдында теле асыла балаһының. Уның Аллаһы ҡаршыһындағы исем-шәрифе - Салауат Дәүләтҡужа улы Ишкилдин икән. Эйе, бөтә донъяға билдәле монументаль һәйкәлдәр оҫтаһы Салауат Александрович Щербаков - ул башҡорт егете Дәүләтҡужа Сиражетдин улы Ишкилдиндың улы.

Мәскәүгә, тимәк, бөтә Рәсәйгә Ватаныбыҙҙың һәм уның халҡының илаһи бөйөклөгөн раҫлаған монументаль композициялар ижад итеүсе шәхестең тамырында башҡорт ҡаны, башҡорт рухы тиртә!

"Ҡайҙа ғына йөрөһәң, матур йөрө, кем балаһы тип үк һорарҙар!" Шулай тип аҡыл-нәсихәт бирә башҡорт йыры. Кем һуң Салауат Щербаковтың атаһы, кем балаһы ул был хәтле һәләтле һәм ынтыматлы ижад оҫтаһы? Оло тарихи Башҡортостандың бөгөн Ырымбур өлкәһендә бүленеп ҡалған Һарыҡташ районы Ҡолсом ауылында тыуған Дәүләтҡужа Сиражетдин улы Ишкилдин - ул Хоҙай мөғжизәһе менән генә иҫән ҡалған башҡорт балаһы. Граждандар һуғышы ғәрәсәтендә һәм 1921 йылғы йот ваҡытында Дәүләтҡужаның йән биргән ата-әсәһе лә, йүн бирерлек бер яҡын туғаны ла иҫән ҡалмай - ул ауыр заманда ике миллионлыҡ башҡорттоң яртыһынан күбе ҡырыла, ҡыйрала, ҡыуыла... Тома етем ҡалған малайға балалар йортонда Александр Семенович Ишкилдов, тип яңы исем бирәләр. Егет ҡорона еткәс, 19 йәшендә Александр (Дәүләтҡужа) Бөйөк Ватан һуғышына алына, сапер булып, дүрт йыл буйы ауыр яу яландарын үтә - Мәскәү, Сталинград, Курск... Ҡаты яраланып, бер күҙен юғалта. Маңлайынан эйәгенә хәтле яра эҙе ҡала. Һуғыштан һуң Мәскәүҙә техникумға уҡырға инә, эшкә ҡала. Мыҡты буйлы, ҡырлас танаулы, ҙур йәшел күҙле егеттең һылыулығын



хатта ҡурҡыныс яра эҙе лә ҡаплай алмай. Түшендә орден-миҙалдары сыңлай. Елена Сергеевна Щербакова исемле Мәскәү ҡыҙы уға "Батыр яугир" тип ғашиҡ була. Елена үҙе лә бик затлы тоҡомдан: уның ата-бабалары араһында священниктар, уҡытыусылар, рәссамдар була. Йәш ғаиләлә бер-бер артлы ике бала донъяға килә. Дәүләтҡужа-Александр улына Салауат тип, ә ҡыҙына Ғәлиә тип исем ҡуша. Үҙенең фамилияһын Ишкилдовтан Ишкилдин тип үҙгәрттерә. Дәүләтҡужаны һуғыш яраһы бик ҡаҡшата, күҙендә тороп ҡалған тимер ярсығы һыҙлап ыҙалата, уның бөтә шатлығы улы Салауат менән ҡыҙы Ғәлиә булһа, бөтә ғорурлығы - башҡортлоғо һәм яугир-фронтовик булыуы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Салауат атаһы менән алты йыл ғына йәшәп өлгөрә, әммә атай хыялын, рухын, сабыр аҡылын ғүмерлеккә йөрәгенә һеңдерә. Дәүләтҡужа бер ҡасан да үҙенең Көньяҡ Уралдан икәнен, "ожмах кеүек илдә" тыуыуын онотмай, туған телен дә яҡшы белә. Башҡорт йырҡөйҙәрен да йырлай ул улына. "Башҡорт икәнемде ҡаным менән, аңым менән тоям. Гендар һәм ҡан ауазы бер ҡеүәт, тән һәм физик таһыллыҡтағы үҙенсәлектәр - икенсе ҡеүәт бирә икән. Минең хатта самбист алымдарым, хатта атлап йөрөүем башҡортса, тиҙәр, йәшәгән һайын мин башҡорт икәнемде нығыраҡ һиҙә барам", - ти Рәсәй художество академияһы академигы, профессор, Мәскәүҙәге иң күренекле Хәрби дан мемориалдарына һәм бөтә Рәсәйгә һоҡланғыс рухлы скульптуралар ижад иткән Салауат Щербаков.

Салауат Щербаков үҙен "йәш башҡорт" тип иҫәпләй, сөнки ул башҡортса һөйләшергә өйрәнә (сит телдәрҙе бик яҡшы белә). Уның ижадын бөтә донъяла яҡшы белһәләр ҙә, Башҡортостанда бик аҙ кешегә генә таныш әле. Фильмды төшөрөүсе төркөм тап ошо уй-маҡсатты алға ҡуя: тамашасыны Салауаттың ижады менән таныштырыу! Күренекле Рәсәй скульпторы, педагог, профессор, Рәсәй художество академияһы академигы, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы, СССР художниктары союзы ағзаһы ул Салауат Александрович Щербаков. Ул ҡырҡтан ашыу һәйкәлдәр авторы, "Хәрби дан ҡалалары" теҙмәһендәге ҡырҡ биш стела шунса һанлы ҡалаларҙа ҡуйылған, уникаль йөкмәткеле интерьер проекттары ундан ашыу, ике тиҫтәләй мемориаль алтаҡталар ижад иткән. Кремль майҙанындағы һәйкәлдәр рәтен дә уйлап табыусы, Мәскәү күрке булған Владимир кенәз һәйкәленең авторы, шулай уҡ император Александр I, митрополит Гермоген, Столыпин һәм башҡа бөйөк шәхестәрҙе һынландырыусы ул.

Фильмды ҡараған һайын һулыш иркенәйә, гүйә, Уралтау үрҙәренә олғашаһың, киң далалар буйлап атта сабаһың. Салауаттың ижади маһирлығы, хыялының киңлеге, ҡулының тәүәккәллеге арбағандан арбай. Ирекһеҙҙән йән йөрәкһеп китә, уның ауыр яранан йүнәлә алмай иртә киткән яугир атаһының рухына тәһлил әйтәһең, уны шулай юғары итеп яратҡан Аллаһыға рәхмәт уҡыйһың...

Яңы документаль фильм авторҙарына - Гәүһәр Батталова, Әлфиә Арыҫланова, Урал Ғатауллин, Илшат Хәлиловтарға мең рәхмәт! Башҡорт - аҫылташ! Әгәр ҙә ул иманлы милли рухын онотмаһа, сәләмәт-һау булһа, төплө белем алһа, яҡшы юлдаштар тапһа, эсмәһә - Аллаһы Тәғәлә уның меңәр йыллыҡ боронғо ҡанында һаҡланған аҫыл һәләттәрен донъяға күрһәтергә, ижад итергә, үҙ юлын ярырға ярҙам итәсәк!

Ғөмүмән, Гәүһәр Батталованың фильмы бик тә кәрәкле теманы күтәрә: нисек эҙмә-эҙлекле һәм тоғро итеп үҙ аҫылыңды һаҡлау, юллау, табыу тураһында ул. Фильмда бер нисә урында Салауат Щербаковтың башҡортса һүҙҙәре ҡушыла. Ул туған теле яңы асылған, милли рухы тоҡанған "йәш башҡорт", киләсәккә уй-ниәттәрен туған телендә яңғырата, һәм был ниәттәр Башҡортостан өсөн дә ҙур яңы эштәргә бәйле буласаҡ. Режиссер Әлфиә Арыҫланованың һоҡландырғыс теүәл монтажлауы, композитор Илшат Хәлиловтың тапҡан көйҙәре фильмға шул тиклем оҫта ялғана, гүйә, оло Йыһан тыны бәрелә, ә әҙәм балаһы шул йәшәү тигән ваҡыт арауығы эсендә үҙенең юлын таба. Кинооператор Урал Ғатауллиндың ижады, ғөмүмән, телевизион кино сәнғәтендә иң күркәм һәм профессиональ күренештәрҙең береһе.

Журналист, шағирә Лариса Абдуллина "Башҡортостан" гәзитендә 2019 йылдың декабрь айында сыҡҡан мәҡәләһендә, һыуға ҡарағандай, Салауат Щербаковтың бөгөнгө хәлтен бәйән иткәйне. Ул Мәскәүҙә йөрөгәндә Ҡыҙыл майҙанда мәшһүр таш һынлы композицияларҙы күрә, уның авторы Салауат Щербаков тигән скульпторҙың башҡорт егете икәнен белеп ҡала. Ошо оҫтаның бөтә донъяға билдәле эштәрен тасуирлап, туғанын күргәндәй шатланып, һөйөнөслә мәҡәлә яҙып та сыға. Салауат Щербаковтың уҡталып алға сапҡан ижад толпарының йүгәнен ул, гүйә, Уралтауға, башҡорт иленә табан ҡайыра, уға тыуған ерендә лә ырыҫлы юлдар юрай. Ларисаның мәҡәләһе шулай тамамлана: "Скульпторҙың Башҡортостан сәнғәте өлкәһендә лә үҙенең ҙур эшен атҡарыу теләге бар. Уның атаһы ла Бөйөк Ватан һуғышы яугиры. Башҡорт атлы дивизияһының командиры Шайморатов генерал тураһында һынлы сәнғәт донъяһында скульптор Салауат Щербаков-Ишкилдинға үҙ һүҙен әйтергә ваҡыт еткәндер..." Ларисаның юрауы юш килә. Күптән түгел генерал Шайморатов һәйкәле макеттарының конкурсы үтте, тиҫтәләрсә эштәр араһынан Сергей Щербаков һәм уның командаһы тәҡдим иткән монументаль һәйкәл һәм композиция өлгөһө еңеп сыҡты. Ул тиҙҙән Өфөнөң Совет майҙанында ҡуйыласаҡ.

Ә мин һаман фильм шауҡымында: эх, беҙҙең бөтә халҡыбыҙ тиҙерәк күрһен ине Салауаттың илһамлы ижад балҡыштарын. Уралтау үрҙәрен, тамашасыны гел юғарыға, яҡтыға әйҙәгәндәй ул тыуҙырған һынлы сәнғәт ҡаҙаныштары. Шул хәтле гүзәллекте бер Аллаһының ярҙамы менән генә бер оҫта кешенең йөрәге һәм ҡулдары яһаған, уның хеҙмәте аша илебеҙ тарихындағы бик күп сәхифәләр көн төшкәндәй яҡтыра, образлы һындарға әйләнеп, заман алдына баҫа.

Фильм бик ихлас төшөрөлгән, унда ҡатнашыусы күренекле рәссам-скульпторҙар барыһы ла Рәсәй Художество академияһы академиктары, профессорҙары, былдай нескә һәм ҡатмарлы сәнғәттең баһаһын белеүсе, мәғәнәһен аңлаусы заттар. Улар фильм геройы Салауат Щербаков тураһында ғына һөйләмәй, ә үҙҙәренең ошо бөйөк эшһөйәр ижадсы менән үткән юлын барлай, сағыштыра, күҙ алдына килтерә, унан алған һабаҡтары, кисергән ҡыуаныстары менән уртаҡлаша. Салауат Щербаков Рәсәй һәм донъя сәнғәтендә үҙ бейеклеген, үҙ вәзен-стилен ҡалдырған оҫта булараҡ, һис яңғыҙ түгел, шуныһы бик ҡиммәт. Ул үҙ тирәһендә тоғро дуҫтар, фекерҙәштәр, уҡыусылар туплаған, улар менән бергә яңы уй-ниәттәрҙә һәм эшмәкәрлектә ҡайнап йәшәй.

Әле килеп оҫта үҙ ижад ҡарашын Башҡортостанына, тыуған халҡы тарихына һәм киләсәгенә йүнәлтә. Фәрештәләр уны яман һүҙҙән һәм яман күҙҙән һаҡлаһын, ижади уңыштар менән бергә баш бәхете, ил бәхете, остаз бәхете лә теләйек.

**Кинйә МӘЗИТ.**

***✓ Стәрлетамаҡ ҡалаһы ағинәйҙәре йыл һайын үткәрә торған Балан байрамында булдым мин. Улар үҙҙәрен тулыһынса "балан батшалары" кеүек тоя: балан ашайҙар, балан эсәләр, баланды ҡушып йырлайҙар...***



ИНТЕРНЕТТАН



# КЕШЕ НИҢӘ АЛДАША?

■ Тестостерон һәм кортизол гормондары артыҡ күп булһа, кеше үҙе лә һиҙмәстән алдаша башлай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 117 кеше математик тест эшләп, уны үҙ аллы тикшереп, һөҙөмтәһен ғалимдарға еткерергә тейеш булған. Дөрөҫ сиселгән мәсьәләләр аҡсалата бүләк менән билдәләнгән. Ғалимдар кешенең гормональ фоны менән алдашыуға һәләте араһында бәйләнеш булыу-булмауы тураһында белергә теләп, анализдар ҙа алған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, кемдәр үҙенең уңышын арттырып әйткән, уларҙа кортизол менән тестостерон кимәле юғарыраҡ булған. Ғалимдар раҫлауынса, кортизол стресс хәлдәрендә күберәк бүленеп сыға, йәғни, кеше алдаша, һөҙөмтәлә стресс кисерә һәм уның кортизол кимәле лә күтәрелә. Ә тестостерон, киреһенсә, ҡурҡыу тойғоһон баҫа, йәғни, кеше яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн, алдашыуға бара һәм бының өсөн уға бер ниндәй ҙә яза булмаясағына ышана.

■ Израилдең Вейцман исемендәге институты ғалимдары яңы яһалма кимерсәк уйлап тапҡан. Ул ошоға тиклем медицина практикаһында ҡулланылып килгән яһалма быуын менән сағыштырғанда ауырлыҡ күтәреүҙә күпкә сыҙамыраҡ. Яңы кимерсәк - ул асылда электрҙан зарядландырылған полимер молекулалар (улар бик бәләкәй, йәғни нонокисәксәләр) һәм уларға йәлеп ителеүсе һыу молекулалары. Тап шулар ярҙамында быуындарҙың бер-береһе менән ышҡылыу көсө кәмей, ә ауырлыҡ күтәреү һәләте арта.

■ Ҡыш тыуған балалар ҡурылдай астмаһы менән өс тапҡырға йышыраҡ сирләүсән була, тип хәбәр итә Америка ғалимдары. Улар был хаҡта, һәр ваҡыттағыса, раҫлап ҡына ҡалмайынса, сәбәптәрен дә аңлатып бирҙе. Элегерәк был сирҙең сәбәптәрен ҡыштың осорҙа тын юлдары вирусының киң таралған мәл булыуына бәйләһәләр, әле иһә ҡыш һауала саң һәм үңәҙ һеркәләренең күпләп тупланыуы менән аңлатыла.

■ Америка ғалимдары асыҡлауынса, ашҡаҙан аҫты биҙенең яман шеш сире кешенең ниндәй ҡан төркөмөнә ҡарауына бәйле. 100 мең кешенең һаулыҡ торошон тикшергәндән һуң, ғалимдар ҡаны I төркөмгә ҡараған кешеләрҙең ашҡаҙан аҫты биҙе менән бик һирәк сирләүе, ә III төркөм ҡанлыларҙың был сиргә йыш бирешеүен асыҡлаған. "Әгәр I төркөм ҡанды өлгө рәүешендә ҡараһаҡ, ҡаны II төркөмгә ҡараған кешеләрҙең яман шеш менән ауырыу хәүефе - 32, III төркөм өсөн - 72, ә IV төркөм өсөн 51 процентҡа арта", - тип раҫлай тикшеренеүселәр. Шул уҡ ваҡытта улар III төркөм ҡан йөрөтөүселәрҙе, сирҙе ваҡытында асыҡлау өсөн, ашҡаҙан аҫты биҙҙәрен УЗИ ярҙамында йышыраҡ тикшереп торорға саҡыра.

■ Телевизорҙы күп ҡараған балалар әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе аңлау һәләтен юғалта. Эксперимент 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларҙа үткәрелгән. Уларҙың атаәсәләре бала телевизор алдында күпме ваҡыт үткәрә, телевизор бүлмәнең ҡайһы урынында тора тигән һорауҙарға яуап биргән. Бүлмәлә телевизор даими тоҡандырып ҡуйылған булһа, бала башҡа кешеләрҙең кәйефен һәм тойғоларын насарыраҡ аңлай икән. Артабан был аралашыуҙа ҙур проблемалар тыуҙыра. Психологтар әйтеүенсә, экранда барған ситуацияларҙағы геройҙарҙың тойғолары бары уйын ғына йәки артыҡ шаштырып ебәрелгән була.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**"Татар телле Ғәйнә башҡорто беҙ, башҡорт рухлы Ғәйнә татары". Пермь крайына беренсе тапҡыр командировкаға барғанда сәхнәнән яңғыраған ошо шиғыр юлдарын ишетеп, тетрәнелгәйне. Ысынлап та, ул ваҡытта ғәйнәләрҙең теле башҡорт теленең диалекты булыуын теоретик яҡтан белһәк тә, ғәмәлдә, осрашып, күрешеп, аралашырға тура килмәгәнлектән, үҙ ерлегендәге телдә сығыш яһаған һәм, "Ҡаҙанға барһаҡ, беҙҙе "башҡорт" тиҙәр, Өфөгә барһаҡ, беҙ - "татар", тип әсенгән милләттәштәребеҙҙең үҙҙәрен нисек тойоуын, моңайын, шундай хәл-торошта ҡалғандар үҙҙәре генә аңлайҙыр. Ә бит ғалимдарҙың, бигерәк тә генетика буйынса бынан күп йылдар элек милләттәрҙең барлыҡҡа килеү һәм үҙ-ара йоғонтоло аралашыу майҙаны булған Волга-Урал төбәге территорияһындағы тикшеренеүҙәре тап ғәйнәләрҙә гендарҙың күпселектә үҙгәрмәй, таҙа килеш һаҡланыуын асыҡлай. Йәғни ғәйнәләр борондан килгән йәшәү кодын боҙмай һаҡлап ҡала алған ҡәүем.**

# ҒӘЙНӘ БАШҠОРТТАРЫНДА

Бөгөн, глобаллашеү, цифрлашыу кеүек донъяуи күренештәр, бер яҡтан, ыңғай күренеш булғанда, икенсе яҡтан, хәүеф менән янағанда, былай ҙа ассимиляцияға ҡаршы аяҡ терәп көрәшергә мәжбүр булған ғәйнә башҡорттары нисек йәшәй? 18-20 мартта Пермь төбәгендә үткән Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре был һорауға яуап тапҡандыр, моғайын. Ғәмәлдә, был төбәктә саралар 16 мартта - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағында эшләп килгән Республика ата-әсәләр комиссияһының Пермь крайы ата-әсәләр йәмәғәтселеге менән "Туған тел - изге аманат" тип аталған онлайн-осрашыуынан башланып, башҡорт телен ғаиләлә, балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә өйрәнеү мәсьәләләре, телде өйрәтеү буйынса заманса мобиль ҡушымталар ҡаралды. 18 мартта иһә Барҙа ауылының Ғабдулла Тукай исемендәге гимназияһында "Тамыр" телеканалы һәм "Аҡбуҙат" журналы коллективтары, "Мәргән уҡсы" хәрәкәте етәксеһе Юлай Ғәлиуллин эш башланы. Улар балалар менән аралашты, милли кейемдә фотосессия ойошторҙо, төрлө уйындар үткәрҙе, "Нурбостан", "Шумер" йәнһүрәттәрен күрһәтте, уҡтан атыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре уҙғарҙы. Булат Йосопов һәм Айнур Асҡаровтың нәфис фильмдары күрһәтелде.

Шул уҡ көндө Төңгүк ауылының Мәҙәни-ял үҙәгендә Ғәйнә башҡорттарының съезы үтте. Сарала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова, Пермь крайының Барҙа районы башлығы урынбаҫары Татьяна Балтаева, Башҡортостан мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, Тәтешле районы башлығы Фәнүр Шәйхисламов ҡатнашты. Ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, Эльвира Айытҡолова туған телде һаҡларға, уны тәү сиратта ғаиләлә онотмаҫҡа өндәне: "Бишенсе ҡоролтайҙа Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров "Ниндәй телдә, диалектта һөйләшеүенә ҡарамаҫтан, үҙен башҡорт тип иҫәпләгән һәр кемде беҙ башҡорт тип ҡабул итергә тейешбеҙ. Ырыуҙар йыйыны үткәргәндә ошо маҡсатты ла алға ҡуябыҙ. Башҡорт теленең диалекттары, һөйләштәре күп, милләттәштәребеҙҙе тел буйынса айырмайыҡ. Былтыр халыҡ-ара кимәлдә башҡорт теленән диктант яҙыу ойоштороҡ, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары уны үҙ диалектында яҙҙы. Сара быйыл да апрель айында үтә, ҡатнашырға онотмағыҙ", - тине.

Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан Стратегик тикшеренеүҙәр институтының социомәҙәни анализ үҙәге етәксеһе Юлдаш Йосопов махсус карта ярҙамында башҡорт ырыуҙары менән таныштырҙы. "Башҡортостан флагындағы ҡурай символындағы ете тажға ҡарап, күптәр башҡорттарҙы ете ырыу ғына берләштерә икән тип уйлай. Был дөрөҫ түгел, беҙҙә ырыуҙар хатта яҡынса иллегә етә", - тип аңлатты ул һәм ни өсөн тап башҡорт халҡында ырыуҙарға бүленештең һаҡланып ҡалыуын да төшөндөрөп үтте. - Ырыу - ул ерҙәргә хоҡуҡ белдереү субъекты. Ә шәжәрә - ул ошо ерҙәрҙә ғүмер баҡый йәшәү фактын иҫбат итеү".

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы аппаратының баш белгесе, "Без - башҡортлар" төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ойошмаһы етәксеһе Радик Бәхтиев сығышын үҙенең бала сағын, мәктәп йылдарын хәтерләүҙән башланы: "Мәктәптә татарса, Татарстан китаптары менән, баш ҡалабыҙ - Ҡаҙан, республикабыҙ - Татарстан, тип уҡыныҡ, ә өйҙә атайым һәр ваҡыт - "без - башҡортлар", ти торғайны. Уларҙың ҡайһыһы хаҡлы икәнен ул ваҡытта асыҡлап тормағанбыҙ ҙа, белмәгәнбеҙ ҙә инде. Әммә атайымдың һәр ваҡыт "без - башҡортлар" тиеүе күңелдә һаҡланып, тынғылыҡ бирмәй ине. Мәктәпте тамамлап, үҙем архив документтары буйынса тикшереүҙәр алып бара башлағас, ысынлап та башҡорттар булыуыбыҙҙы асыҡланым. Башҡорт өсөн шәжәрә - ул уның резюмеһы. Унда алыҫ ата-олатайҙарыбыҙҙың кем булыуы, нимә менән шөғөлләнеүе, ниндәй наградалары, дәрәжәләре булыуы хаҡында мәғлүмәттәр табабыҙ. Хатта һеҙҙең дә ата-бабаларығыҙ данлыҡлы булыуы мөмкин, сөнки улар һәр ваҡыт шәжәрәһенең өҙөлмәй дауам итеүе һәм унда мөһим мәғлүмәттең яҙылып барыуы хаҡында хәстәрлек күргән. Әгәр мин бөгөн үҙемде татар тип йөрөһәм, баҡыйлыҡта атайолатайҙарым алдында нимә тип яуап бирермен? Ата-бабаларыбыҙ үҙҙәрен генә түгел, бар ете быуынын ҡайғыртҡан, уларҙың теге йәки был эштәре, шөғөлдәре хаҡында шәжәрәгә яҙылып ҡалдырыла килгән. Беҙ ҙә нәсел-

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# БЕР ҺАПҠА ҺАПЛАНЫП...

**Бер танышымдың әйткәне гел иҫемә төшә: "Әсәйем мине шулай өйрәтте, - тине ул, - шундай кеше булып үҫ, кешеләр һинең менән бер табында булырға ашҡынып торһон, һинең менән табындаш булыуын бер дан тип һөйләһен".**

Күптән түгел Стәрлетамаҡ ҡалаһында йыраусы Мәрйәм апай Солтанова, уҡытыусы Вәсилә Халиҡова һәм ҡурайсы Фуат Юнысбаев менән табындаш булдым. Ошо өс исемде генә әйткәндә лә бик күп нәмә аңлашыла торғандыр аңларға теләгәндәргә. Аллаһыға шөкөр, дан итеп һөйләрлек ҡыуаныс кисерҙем. Стәрлетамаҡ ҡалаһы ағинәйҙәре йыл һайын үткәрә торған Балан байрамында булдым мин. Улар өсөнсө мәртәбә генә йыйылһалар ҙа, үҙҙәрен тулыһынса "балан батшалары" кеүек тоя: балан ашайҙар, балан эсәләр, баланды ҡушып йырлайҙар һәм шиғыр һөйләйҙәр, хатта балан ҡалпағы кейеп бейеп күрһәттеләр...

Байрам уртаһында йөрөгән өс хөрмәт эйәһенең иң олоһо Мәрйәм апай Солтанованың илһамлы сығышын тамам ҡуҡҡа сөйөп, уның бик популяр "Бәхет бит ул" тигән йыры яңғыраны. "Бәхет бит ул" нимә бөгөн? Әлбиттә, тыныслыҡ. Әлбиттә, иман байлығы. Әлбиттә, һаулыҡ. Йәғни йәнә бер донъя һабағы иҫкә төшә: "Яғымлы булһаң - тыныслыҡ, тыныс булһаң - һаулыҡ, һау булһаң - бәхет табырһың". Балан байрамына йыйылған мөләйем ҡатындарҙан ҙа шундай яғымлылыҡ, бер-береһенә ихтирам һәм ышаныс бөркөлә.

Ҡайны бер йортто ҡотло тиҙәр, ҡайһыһын һис улай тип әйтеп булмай. Стәрлетамаҡ ҡалаһы уртаһындағы "Аҡ ҡайын" кафеһына бик күп ҡунаҡтар йыйған "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Вәсилә Мөхәррәм ҡыҙы Халиҡова үҙ тирәһенә әхирәттәрен шундай татыулыҡ һәм йылылыҡ менән туплай, күрәһең. Ҡотло уның тирәяғы. Ана бит! Байрамда күбәләктәй осоп-ҡунып йөрөгән Гөлшат Кәлимуллина әле бейей, әле көлә, әле шиғыр уҡый. Ыңғайында үҙ хәлен һөйләп үтә: "Ошо Стәрлелә Ленин исемендәге мәктәптә ҡырҡ бер йыл уҡыттым, үҙем Ғафури районы Имәндәш ауылында тыуғанмын, ана ултыра минең ауылдаштарым! - тип гөр килеп өҫтәл уратып ултырған төркөмгә күрһәтә. - Ҡайҙан ҡайҙа Стәрлегә килгәндәр бит әле! Ҡырҡ саҡрымдан килгән яҡташтарым!" Боронғо сама менән самалап әйткәндә, "ҡырҡ саҡрымдан"- ул "бик алыҫтан", тигәнде аңлата шикелле. Шаяртыуы, яратыуы бергәләр инде. Ысынлап

*✓ Рәсил Мөхәмәтйәнов ғәйнә башҡорттары һөйләше үҙенсәлектәренә туҡталып, билдәле ғалим, фольклорсы Әхмәт Сөләймәновтың: "Һинең телең башҡорт теле, уның үҙенсәлеген һаҡларға кәрәк", - тиеүен билдәләп үтте.*



дәребеҙ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәйек, шәжәрәбеҙҙе лайыҡлы эштәр менән тулыландырайыҡ һәм дауам итәйек", - тип тамамланы ул һүҙен.

Ырыу башлығы Марат Мозафаров Пермь крайы башҡорттарының һуңғы йылдарҙағы эшмәкәрлегенә байҡау яһаны, көнүҙәк проблемаларға ла туҡталды, йәш быуында үҙ тамырҙарына, тарихҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу һүрелеүе күҙәтелеүен билдәләне. Крайҙың башҡорттар ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Рәсил Мөхәмәтйәнов ғәйнә башҡорттары һөйләше үҙенсәлектәренә туҡталып, заманында тырышып-тырмашып башҡорт әҙәби телендә һөйләшергә маташҡанда билдәле ғалим, фольклорсы Әхмәт Сөләймәновтың: "Һинең телең башҡорт теле, уның үҙенсәлеген һаҡларға кәрәк", - тиеүен билдәләп үтте. Әйткәндәй, былтыр Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡортостан Республикаһы Башлығының Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән грантын ота һәм 10 урында башҡорт телен өйрәнеү буйынса факультатив дәрестәр алып бара, уларҙа 140-тан ашыу бала шөғөлләнә. 2000 дана "Ғәйнә һүҙлеге" тигән китапты грант аҡсаһына һәм бағыусылар ярҙамында сығаралар. Был китапҡа 3 меңдән ашыу һүҙ кергән. Урындағы яҙыусының ғәйнә телендәге шиғырҙарын, шулай уҡ рус телле гәзиткә ҡушымта сығарыла. Туҡтамыш Ишбулатовҡа бюст асыла. Быйылғы грантҡа бюст эргәһенә "Алтын китаптар" тигән мәғлүмәти стенд ҡуйырға планлаштыралар. Уларҙың береһендә - Исмәғил Тасимов, икенсеһендә - Туҡтамыш Ишбулатов, өсөнсөһөндә - Салауат Юлаев бригадаһында полковник дәрәжәһе алған шәхестәр, дүртенсеһендә 1812 йылғы Ватан һуғышында миҙалдар алған ғәйнәләр тураһында мәғлүмәт буласаҡ.

Рәфис Мукаев сығышын топонимика йүнәлешенә арнаны, урындағы ерһыу атамаларының тап башҡорт теленең ғәйнә һөйләшендә булыуын, был ерҙәрҙә элек-электән ғәйнә башҡорттары йәшәүен иҫбатлауын иғтибарға алды. "Йыйын үткән ауылдың исеме - Төнгүк, ул "төн кеүек" һүҙбәйләнешенән сыҡҡан", - тине Рәфис Рәмис улы. Ә бына Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының рәйес урынбаҫары Рушан Шәрипов этник спорт төрҙәре, атап әйткәндә, көрәш, ат ярышы, төрлө милли уйындарға иғтибар йүнәлтте, ат сабыштарының был ерҙәрҙәң төп спорт төрө булып тороуын билдәләне.

Башкултай (Башҡорт Ҡолтай) ауылынан крайҙы өйрәнеүсе Фаил Сәйҙәшев тә тарихты һаҡларға саҡырҙы: "Беҙҙең ауылдаштар аҫаба ерҙәрен яҡлап, һаҡлап хатта батшаға барып еткән. Шулай уҡ тарихтан билдәле башҡа арҙаҡлы яҡташтарыбыҙ ҙа бар. Шуға ҡарамаҫтан, Исмәғил Тасимов татар ғалимдарының китаптарында "татар" булып инеп китә - был бер ҡалыпҡа ла һыймай. Беҙгә үҙ тарихыбыҙҙы китаптар, тыуған яҡты өйрәнеү материалдарын нәшер итеп һаҡларға кәрәк".

Конференция һуңында ғәйнә ырыуы советы башлығы итеп ҡабаттан Марат Мозафаров һайланды, йыйылыштың резолюцияһы ҡабул ителде. Унда башҡа пункттар менән бер рәттән, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә "Юлдаш" радиоһы һәм "Башҡортостан" юлдаш телевидениеһын Пермь крайы биләмәләрендә тыңлау һәм ҡарау мөмкинлеген булдырыу; Пермь крайындағы Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге эргәһендә башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында эшләүсе хәбәрселәр пунктын асыу; ғәйнә башҡорттарының фольклорын, боронғо кейемдәрен һәм биҙәүестәрен өйрәнеү буйынса фәнни эшмәкәрлекте дауам итеү тураһында мөрәжәғәт итергә, тигән пункттар ҙа индерелде.

Ике көн дауам иткән сара барышында Елпачиха урта мәктәбендә башҡорт телен өйрәнеү буйынса йәкшәмбе мәктәбе асылды, класты йыһазландырыу өсөн ноутбук, заманса мультимедиа ҡоролмаһы һәм ике комплект ете томлыҡ Башҡортостан энциклопедияһы бүләк ителде. Дәрестәр башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында алып барыласаҡ, бынан тыш Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте лә уҡытыласаҡ. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "Башҡорт теле - башҡорт иле" йәкшәмбе мәҙәни-тарихи мәктәбе" проекты Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты еңеүсеһе булды һәм был сара ошо проект сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Шулай уҡ Барҙа районының Үдек ауылында ла йәкшәмбе мәктәбе асылды. Уға ла проектор, проектор өсөн экран тапшырылды. Хәбәр итеүебеҙсә, Пермь крайында 2020 йылдың октябренән Ғабдулла Туҡай исемендәге Барҙа гимназияһында ла йәкшәмбе башҡорт мәктәбе эшләп килә. Унда утыҙ бала шөғөлләнә. "Рәсәй буйынса туғыҙ йәкшәмбе мәктәбен асырға йыйынабыҙ, Пермь крайында ике мәктәп асыуға өлгәштек. Был йәкшәмбе мәктәптәрендә телде, мәҙәниәтте, тарихты өйрәнеү йәһәтенән күп эштәр башҡарыласаҡ", - ти Рәми Ғарипов исемендәге гимназия-интернат директоры Илнур Сәлихов.

Бисура (тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров үҙенең "Башҡортостан һәм уның сиктәш территориялары ауылдары тарихы" китабында Бисер ауылы атамаһын шулай тип күрһәтә) ауылында "Ғәйнәләр - халҡым, телем, тарихым" проектына ярашлы мәҙәни-мәғлүмәти конференция, концерт ойошторолдо. Унда шулай уҡ төбәк башҡорттары ҡоролтайының "Пермдә тыуған арҙаҡлы шәхестәр - Ғәйнә башҡорттары" күргәҙмәһе эшләне. Артабан Айнур Асҡаров "Өс таған" фильмын күрһәтте, аҙаҡтан режиссер һәм төп ролдәрҙә уйнаған актер малайҙар - Ғабдулла ролен башҡарған Илдар Биҡколов менән Вәзирҙе уйнаған Арыҫлан Гәлиев тамашасылар менән аралашты. Пермь районының билдәле Башҡултай ауыл халҡы ла сараларҙан ситтә ҡалманы. Әйткәндәй, был ауыл ябай слесарь-сантехник Әнәс Мырҙаҡаев дүрт йыл ярым эшләгән бейеклеге 7 метрға етә яҙған тимер дүңгәләктәрҙән торған, заманса әйткәндә, монументаль арт-объект менән дә билдәле. "Батыр торҡаһы" тип атаған һәйкәл башҡорт батырҙарына арналған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғәйнә башҡорттары башҡорт халҡы тарихына данлы биттәр яҙған: XVIII быуатта ырыу старшинаһы Ишбулат Туҡтамышев Өфө провинцияһының һайлаусы башҡорттары исеменән наказ йыя, башҡорттарҙың мәнфәғәтен 20 йыл дауамында юғары дәүләт органы - Уложенная комиссияла яҡлай. Үрҙә телгә алынған Исмәғил Тасимов - эре сәнәғәтсе, үҙ иҫәбенә Петербургта Тау училищеһын аса һәм һуңынан ошо уҡыу йорто нигеҙендә Петербург тау институты ойошторола. Ғәйнә волосы 1-се Башҡорт кантоны составына инә һәм был кантон атлылары 1812 йылғы Ватан һуғышында әүҙем ҡатнаша. Тарихын белгән - тамырлы, тип юҡҡа әйтмәйҙәр, сөнки тамыры ныҡ ағас ҡына аумай. Ә ғәйнәләрҙең данлы тарихы тураһында архив сығанаҡтарына нигеҙләнеп яҙылған мәғлүмәттәр бик күп һәм бай. Тарихты нисек кенә үҙгәртергә тырышҡанда ла, архивтағы ҡулъяҙмаларҙы бер кем дә үҙгәртә лә, уларҙы инҡар ҙа итә алмай. Шуның менән көслө лә инде ырыуҙарыбыҙ!**

**Баҫмаға Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**



та, Ғафури районы Имәндәш ауылынан китапханасы Айгөл Түҙбәкова етәкселегендә Рәмилә Мәхмүтова, Резеда Ишемйәрова, Гүзәл Хисаметдинова, Миләүшә Мостафиналар күнелле ҡор булып сәхнә майҙансығына сығыр әле. Бар халыҡтың күҙ майын иретеп тыңлаусы, Миләүшә Мостафина бейеп китер. Мин дә, уның бейеүен тағы бер күрер өсөн әллә ҡайҙа барыр инем, тигән булайым әле. Шулай хупларлыҡ, шулай һоҡланырлыҡ итеп бейей ҙә ул! Әллә тымыҡ күлдә аҡҡош булып йөҙә, әллә гөлдәр араһынан болон гиҙә... Ҡыҫҡаһы, йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер күрергә кәрәк. Әллә ҡурайсыһы ла килешә микән: Фуат Юнысбаев һәр бер сығышты зиңғыр көйҙәре менән биҙәп тора. Шуғалыр ҙа, бөтә Балан байрамы туған моңдарға күмелә.

Вәсилә Мөхәррәм ҡыҙы Стәрлетамаҡта халыҡ һәүәскәрҙәрен "Комартҡы" ансамбленә туплап, замамында "Ашҡаҙар таңдары" төбәк-ара оло башҡорт фестивалдәрен гөрләткәйне, бер нисә мәртәбә еңеүсе дипломын алдылар. Бигерәк тәрән йөкмәткеле темалар күтәргәйне сәрләләр ("Француз яуы", "Ҡоҙа ҡаршылау", "Батырҙарҙы данлау"). "Комартҡы" республикабыҙҙың төүге баш ҡалаһында, ағыулы газ таратыусы завод-фабрикалар ҡамауындағы боронғо ҡала йәшәгән милләттәштәрҙең һәләтле йәшен-картын, бала-сағаһын бергә дәртле сәхнә ҡошона әйләндереп, бик матур тамашалар күрһәтте. Уларҙың махсус музыкаль белемле өйрәтеүселәргә эйәргәне күренеп тора. Фәнүзә Юнысова, Рәмилә Заһиҙуллина, Гөлсөм Иралина, Роза Ҡобағошова, Гөлсирә Әбдрәхимова, Жәүфирә Нәжметдинова, Миңнифа Сәйфуллина, Нажиә Харисова, Юнира Исхаҡова, Гөлүзә Әхмәҙиева (думбырасы), Фуат Юнысбаев (йыраусы һәм ҡурайсы), Әлиә Нурмөхәмәтова (бейеүсе), "Ағинәйҙәр" гимны авторы, шағир Хәниф Нәжметдинов.

**(Дауамы 15-се биттә).**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺӘЛӘТЕҢДЕ ФАЙҘАЛАНА БЕЛ

Имен, етеш тормошҡа өлгәшеү үҙеңде лайыҡлы маҡсатыңды тормошҡа ашырыуға арнауҙы талап итә. Әгәр һин аңлы рәүештә маҡсатҡа ынтылыу яуаплылығы алмаһаң, капитанһыҙ карапҡа оҡшап ҡаласаҡһың, ә капитанһыҙ карап, гәҙәттә, ниндәй ҙә булһа буш утрауға килеп терәлеп, һәләкәткә дусар була.

Ғаләмдә Ижад планын тормошҡа ашырыусы аҡыллы Көс бар. Һин - ошо пландың бер өлөшө. Проблемаларыңдың күбеһе һинең үҙ урыныңда булмауыңдан да килеп сығыуы ихтимал. Борон-борондан тормошта барған бөтә ваҡиғалар Ижад планының бер өлөшө булып тора. Донъяларға бөтә бөйөк ҡаҙаныштарға кешеләрҙең тормошҡа ашырыуға рухландырған эске тауышҡа ҡолаҡ һалыуы һөҙөмтәһендә өлгәшелгән.

Тормоштан көҙәтелеүенсә, билдәле бер план ҡороп йәшәүселәр планһыҙ йәшәүселәргә ҡарағанда күпкә бәхетлерәк һәм уңышлыраҡ. Һинең тормошоң өлгәшкәненә баһа бирерлек итеп планлаштырылырға тейеш. Маҡсатыңды билдәләмәһәң, нимәгәләр өлгәшеү-өлгәшмәүеңде ҡайҙан беләһең? Үҙ һәләттәрең менән ҡораллан да маҡсатыңа табан тура атла.

Маҡсатҡа өлгәшеү серҙәренең береһе - ҙур бурысыңды бер нисә бәләкәй өлөшкә бүлеү. Бәләкәй бер өлөшөн бойомға ашырыуҙан ҡәнәғәтлек алыу киләһенә өлгәшеүгә этәргес булып тора.

Иң мөһиме, үҙеңдең нимәгә ынтылғаның да аңларға кәрәк. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр: "Мин үҙемдең ысынында нимә теләгәнемде лә белмәйем", - ти. Был ни бары үҙ тормошоң өсөн яуаплылыҡтан ҡасыу өсөн һылтау ғына. Кире ҡағырҙар йәки уңышһыҙлыҡҡа осрармын, тип ҡурҡып ҡалыу кешене әсирҙә тота.

Уңышты һайламау, тимәк, уңышһыҙлыҡты һайлау тигәнде белдерә. Баҙнатһыҙлыҡ та күңел төшөнкөлөгөнә килтерә. Уңышлы эшләргә ынтылыу урынына, үҙ-үҙебеҙҙә шикләнеп һәм кәмселек тойғоһо кисереп, икеләнеп ҡалабыҙ. Ә лайыҡлы маҡсат һайлауға ваҡыт бүлеп кенә лә һин үҙ-үҙеңә ышаныс артыуын тояасаҡһың.

Маҡсатыңды билдәләп, план ҡорор алдынан эстән генә түбәндәге һорауҙарға яуап бир:

1. Мин ысынлап та быны теләйемме?
2. Был минең ҡиммәттәр системаһына тап киләме?
3. Был тормошҡа ашырырлыҡмы?
4. Быны бөтә аспекттарҙа ла күҙ алдына килтерә аламмы?
5. Маҡсатыма өлгәшкәс, мин яҡшырырмынмы?
6. Алла ярҙамы менән быны эшләй алырыма ышанаммы?

Әгәр бөтә һорауҙарға ла ыңғай яуап бирһәң, план төҙөүгә тотонорға мөмкин. Быныңда өсөн һин:

1. Маҡсатыңды аныҡ билдәләргә тейешһең.
2. Программаңды үтәй башлау датаһын билдәлә.
3. Ғәмәлдәреңдең яҙма планын булдыр.
4. Үҙгәрештәр һәм яңылыҡтар индереү өсөн үҙ планыңды ҡарап сығыу графигын эшкәрт.
5. Маҡсатыңдың ҡыҫҡаса билдәләмәһен яҙып алып, йыш ҡына уға күҙ һал.
6. Иғтибарыңды бер үҙенсәлекле ғәмәлгә тупла.
7. Йоҡлар алдынан үҙ маҡсатыңдың образын һүрәткә төшөр.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



## 29 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теория вероятности". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 1.45 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вундеркинды". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 30 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 0.55, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 Д/ф "Черная кошка". К 85-летию Станислава Говорухина". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теория вероятности". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00, 1.45 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Голос". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Осень". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 31 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теория вероятности". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Спортивная история. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Кого ты любишь". [16+]**
**1.45 Башкорттар. [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 1 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Времена не выбирают". Ко дню рождения Владимира Познера. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теория вероятности". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 4.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Воображариум". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 2 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 1.45 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.35 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.05 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Дом Пьера Кардена". [16+]
4.35 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теория вероятности". [16+]
0.20 Дом культуры и смеха. [16+]
2.45 Х/ф "Красавец и чудовище". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Д/с "Легенды космоса". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 5.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "100-летний азан". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Благодетель". [12+]**
**2.45 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**6.00 "Млечный путь". [12+]**

## 3 АПРЕЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Дом Пьера Кардена". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Угрюм-река". [16+]
18.10 Д/ф "Первый канал. От Москвы до самых до окраин". [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Паразиты". [18+]
1.20 Модный приговор. [6+]
2.10 Давай поженимся! [16+]
2.50 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Тайна Марии". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Отдай свою жизнь". [12+]
1.10 Х/ф "Деревенщина". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 История одного села. [12+]**
**9.00 Кустәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Үткән гүмер. [12+]**
**12.00 Автограф. [12+]**
**12.30 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**13.15 "Курай даны". [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 23.15 Концерт. [12+]**
**17.30 "Кош юлы. Балалар". Детский телеконкурс башкирской бардовской песни. [6+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30, 22.00 Яңы моң. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш.яз.).**
**0.00 Х/ф "Море внутри". [16+]**
**3.00 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 4 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Свадьбы и разводы". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "Доктора против интернета". [12+]
15.00 Д/ф "Который год я по земле скитаюсь..." Ко дню рождения Ильи Резника. [16+]
16.10 Ко дню рождения Ильи Резника. Юбилейный вечер. [12+]
18.35 "Точь-в-точь". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
23.10 Т/с Премьера. "Налет-2". [16+]
0.05 Д/с "Еврейское счастье". [18+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.15, 1.30 Х/ф "Бесприданница". [12+]
5.50, 3.05 Х/ф "Примета на счастье". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.40 Т/с "Тайна Марии". [12+]
17.45 Ну-ка, все вместе! [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТека!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Лидеры региона. [12+]**
**17.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**18.15 Т/с "Бирешмә!" [6+]**
**19.15 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Как выйти замуж за миллионера". [12+]**
**1.45 Спектакль "Дачники". [12+]**
**4.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (16) дүшәмбе | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 18:15 | 19:45 | 21:15 |
| 30 (17) шишәмбе | 5:25 | 6:55 | 13:30 | 18:17 | 19:47 | 21:17 |
| 31 (18) шаршамбы | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 18:19 | 19:49 | 21:19 |
| 1 (19) кесе йома | 5:20 | 6:50 | 13:30 | 18:21 | 19:51 | 21:21 |
| 2 (20) йома | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |
| 3 (21) шәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |
| 4 (22) йәкшәмбе | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 18:27 | 19:57 | 21:27 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**Үҙ еребеҙҙә эш булмағанлыктан, аҡса эшләйем тип, күп кенә ир-егеттәр сит яҡтарға сығып китә. Ҡатын менән ир бер-береһенән айырылып торорға мәжбүр була, балалар ҙа атай терәген, арҡаһын тойоп үҫеүҙән мәхрүм ҡала.**



ТАМАШАҺЫ ҠОЛАҒЫНА...

# ДИМСЕ ДИҢГЕҘ КИСТЕРӘ



**Салауат башҡорт дәүләт драма театры коллективы, ғәҙәттә, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан сәхнәгә премьера сығара. Быйыл да уның сәхнәһендә премьера - Сәрүәр Суринаның "Абау, димсе килә!" әҫәре буйынса спектакль күрһәтелде.**

Премьера көндө Өфөнән пьесаның авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, драматург Сәрүәр Сурина һәм билдәле театр тәнҡитсеһе Динә Дәүләтшина ла килгәйне.

***Ҡунаҡтар араһында булған Салауат ҡала округы хакимиәте башлығы Игорь Миронов спектаклдән һуң артистар менән осрашып, тәьҫораттары менән бүлешеп, рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе:*** Бөгөн театр менән ысын мәғәнәһендә беренсе танышыуым булды. Ни өсөн беренсеме? Сөнки тамашасы залында булып ҡына театр донъяһына сума, актерҙарҙың, режиссерҙың талантын тоя алаһың. Әммә беҙгә, етәкселәргә, был бәхет бик үк эләкмәй. Спектакль оҡшаны, бөтә күңелем менән ял иттем. Театрҙың бөтә командаһына рәхмәт һүҙҙәрен еткергем килә. Афарин, был спектакле барыһына ла ҡарарға кәңәш итәм, - тине Игорь Геннадьевич.

Ҡуйылған әҫәр музыкаль комедия һаналһа ла, унда заманыбыҙҙың иң көнүҙәк проблемалары сағылдырыла. Режиссерҙың таланты шунда ла: ул тамашасыға тормошобоҙҙағы һәр кемде борсоған проблемаларҙы күрһәтеп кенә ҡалмай, ә ауыр хәлдән сығыу юлдары булыуын да иҫкәртә. Һәр заманда ла Ағинәй дәрәжәһендәге ҡатын-ҡыҙҙың, әсәнең бик күп һынауҙарҙан ҡурсалаусы, ҡотҡарыусы булыуын раҫлай был спектакль. Ағинәй бында димсе ролен генә уйнамай, ә аҡыллы, төплө кәңәштәрен биреп, күп кенә ғаиләләрҙе һаҡлап ҡалыусы абруй ҙа. Ул үҙе лә ябай димсе түгел, ә бәхетһеҙ мөхәббәт ҡорбаны. Әммә ғәфү итә белеүе арҡаһында ул һөйгәне менән ҡабаттан ҡауышып, бәхеткә өлгәшә алған. Ҡыҫҡаһы, спектакль аҙағына барыһы ла үҙ иштәрен, йәнкәй-йәнәштәрен таба. Хатта йәшләй генә йәрен юғалтып, башҡаса үҙ ишен осратыуға өмөтөн өҙгән, бар һөйөүен әсәләренән мәхрүм ҡалған ҡыҙҙарҙы тәрбиәләүгә арнаған оло йәштәге Әминә лә.

***Ағинәй дәрәжәһендәге ҡатын-ҡыҙҙың абруйы хаҡында әҫәр авторы Сәрүәр Сурина шулай ти:*** Был Башҡортостанда күптән йәшәгән бик боронғо тема. Йәш кенә ҡыҙҙарыбыҙҙан, балаларыбыҙҙан башлап өлкән әбейҙәргә хәтлем, бар ҡатын-ҡыҙ Ағинәй дәрәжәһендәге ҡатын-ҡыҙҙа аҡ күңеллелек, тәүфиҡ, иман сағылышын күрергә тырыша. Замандар үҙгәреп, ауылдар, ғаиләләр тарҡалғанда, беҙ ошо Ағинәйгә кәңәш һорап мөрәжәғәт итәбеҙ. Ул кешеләрҙе ҡотҡарырға, ярҙам итергә, кәңәш бирергә, нисек тә булһа яҡтылыҡҡа сығарырға ярҙам итә. Шуға күрә мин дә үҙ әҫәремдә халыҡтың асылын, йолаларын, рухын ошо Ағинәй образы аша күрһәтергә тырыштым. Салауат театры актерҙары халыҡҡа әйтергә теләгән һүҙҙәремде таман ғына еткерә алды. Мин артистарға, режиссерҙарға бик рәхмәтлемен һәм киләсәктә лә уларға уңыштар теләйем. "Беҙҙең халыҡ йәшәй бит әле, уның шундай матур юморы образдарға терәлгән аҡылы бар. Ул аҡыл бер ваҡытта ла һайыҡмаясаҡ, ул һәр ваҡыт беҙҙең халыҡта йәшәйәсәк", - тигән фекерҙе ошо спектакль аша ла тамашасыға еткереүҙе дауам итерҙәр, тип өмөтләнәм, - тине Сәрүәр Рәшит ҡыҙы.

Спектаклдә яңғыҙлыҡ, мөхәббәт, тормош, ғаиләне һаҡлап ҡалыу темалары ғына түгел, ә бөгөнгө иң көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе - эшһеҙлек проблемаһы ла күтәрелә. Тап үҙ еребеҙҙә эш булмағанлыктан, ғаиләһен туйҙырам, аҡса эшләйем тип, күп кенә ир-егеттәр сит яҡтарға сығып китә. Шул сәбәпле, ҡатын менән ир бер-береһенән әллә нисәмә айҙарға айырылып торорға мәжбүр була, балалар ҙа атай терәген, арҡаһын тойоп үҫеүҙән мәхрүм ҡала. Иң үкенеслеһе шул: йыш ҡына осраҡтарҙа ғаилә тарҡалып та ҡуя. Спектаклдә тап ошо бәкәлгә һуҡҡан проблеманың да хәл итеү юлдары барлығы, тырыш кешегә үҙ илендә лә бынамын тигән итеп эшләп, донъя көтөп булыуы асып бирелә.

***Спектаклдең режиссеры Зиннур Сөләймәновтың был Салауат театрында ҡуйған дүртенсе әҫәре:*** Спектаклдә бөтә труппа ҡатнашты, улар йәнен-тәнен биреп ихлас уйнаны. Әлбиттә, спектаклде сәхнәгә ҡуйыусы команданы ла билдәләмәй булдыра алмайым. Үҙ эшен белеүсе, оҫта балетмейстер Сулпан Аҫҡарова, рәссам Рөстәм Баймөхәмәтов һәм йәш композитор Илсаф Вәдүтов та спектаклдең уңышлы килеп сығыуына булышлыҡ итте. Әйтергә кәрәк, Илсаф менән мин беренсе тапҡыр эшләнем һәм ул яҙған көйҙәр менән бик ҡәнәғәтмен. Бөгөнгө көндә, пандемиянан һуң, халыҡҡа яңы һулыш булырҙай, уларҙың күңелен күтәрерҙәй спектакль эшләргә тырыштыҡ инде һәм ҡуйған маҡсаттарға ирештек, тип уйлайым. Минеңсә, бик матур спектакль килеп сыҡты. Быны тамашасыларҙың бер туҡтауһыҙ ҡул сабыуҙарынан, оҙаҡ ҡына артистарҙы сәхнәнән ебәрмәй, уларҙы ҡат-ҡат алҡышлауынан, йылы һүҙҙәр әйтеүенән аңларға була ине. Киләсәктә лә был спектаклдең оҙон ғүмерле булыуын, матур итеп уйналыуын, уның Салауатта ғына түгел, ә күп ҡала-райондарҙа күрһәтелеүен теләйем.

**Динә БӘШИРОВА,**
**театрҙың әҙәби бүлек мөдире.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ



# ҠОТЛАЙБЫҘ!

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы республиканың мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградалары тапшырҙы. Тантана Мәҙәниәт хеҙмәткәре көнө алдынан уҙҙы.**

Радий Хәбиров тантанала 60 мәҙәниәт хеҙмәткәрен дәүләт наградалары менән бүләкләне. Башҡорт һәм татар эстрадаһы легендаһы Фән Вәлиәхмәтов, композитор Рәмил Ғимранов, дирижер һәм композитор, Башҡортостан гимны авторы Фәрит Иҙрисов, Башҡортостандың Милли әҙәбиәт музейы директоры Гөлдәр Моратова Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды. Популяр йырсылар Әнүәр Нурғәлиевҡа, Рөстәм Ғиззәтуллинға, Сәғиҙулла Байегеткә, Фәрүәз Урманшинға, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артисы Йәмил Әбделмәновҡа, Башҡорт драма театры артисы Алһыу Бәхтиеваға "Башҡортостандың халыҡ артисы" тигән абруйлы исем бирелде. Башҡортостан Милли симфоник оркестрының генераль директоры Артур Нәзиуллин республиканың почет грамотаһын алды.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕ ҺУҒА ТОРҒАН ЕГЕТ...

## беләгенән беленә

Хәҡиҡәтте белмәү ғәйеп түгел, белә тороп күрмәү - ғәйеп.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Донъяға ул тиклем айыҡ күҙҙәр менән ҡарама, юҡһа, аҡылдан яҙырһың.

**(Веслав Брудзиньский).**

Уландар онотҡанды ейәндәр иҫкә төшөрһөн. Шуға ла улдарынды тәрбиәләгәндә ебәргән хаталарыңды ейәндәреңде тәрбиәләгәндә төҙәтеү кәрәк.

**(Эйлис Росси).**

Психик сирле ике икең биш була, ти, ә нервылары ҡаҡшаған кеше ике икең дүрт булыуын белә һәм шуның өсөн көйәнә.

**(Гордон Гаммак).**

Теләктәр күплеге - яртылаш ғүмер, ә вайымһыҙлыҡ - ярты үлем.

**(Хәлил Джебран).**

Нәфрәтте йәшереү еңел, мөхәббәтте йәшереү ауыр, ә иң ауыры - вайымһыҙлыҡты йәшереү.

**(Людвиг Берне).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Кеүәтле бер батша бик күп илдәрҙе яулап ала, уның исемен ишетеү менән генә лә күп батшалыҡтар дер ҡалтырай. Ә үҙ халҡы уны бик тә хөрмәт итә, сөнки ул яулап алынған байлыҡтарынан халыҡҡа ла өлөш сығара, шуға ла уның илендәгеләр байлыҡта һәм муллыҡта йәшәй. Ирҙәрҙең барыһы ла үҙ батшаһына оҡшарға ынтыла, уның һымаҡ уҡ көслө һәм мөһабәт булыу хыялы менән яна. Ә ҡатын-ҡыҙҙар уны атай урынына күрә.**

**Батша ҡартая, ул ниндәйҙер сәйер сир эләктерә: ҡулдары һәм аяҡтары ҡатып ҡала, арҡаһы көмөрәйә. Ҡултыҡ таяҡтары менән саҡ ҡына хәрәкәтләнә ала. Был хәлдән һуң батшалыҡта ҡара көндәр башлана. Барыһы ла ҡулдаҡ аҫтына көмөрө эшләп ҡуя, барыһы ла эшкә ҡултыҡ таяҡтарына таянып йөрөй башлай. Батша ҡиәфәтенә яраҡлашырға теләмәгәндәр ҡаты хөкөмгә тарттырыла. Бары тик батшаның улы ғына был хәл менән килешергә, атаһы ҡиәфәтен алырға теләмәй. "Нинә һин башҡаларға эйәрергә теләмәйһең?" - тип һорай унан батша. "Мин бит йәш һәм сәләмәт, мин ҡултыҡ таяҡтарһыҙ ҙа йөрөй алам", - тип яуаплай уға улы. "Ярай, улайһа, күрһәтәйем әле мин һиңә күрмәгәнеңде", - тип ярһый батша һәм ҡулындағы таяғы менән улына һелтәнәйем тиһә, ҡулы күтәрелмәй, бар көүҙәһе хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡала. Бер нисә көндән батша вафат була...**

**Шулай инде, ноябрь май айының нисек тын алғанын белмәй, ә майҙың ноябрҙә эше юҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21013

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3400
Заказ - 213/03